ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

8-14 февраль (шаҡай)

2020

№6 (892)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


## Асҡындар өлгөһө



5

## Һәр сирҙең...

дауаһын да биргән Хоҙай



7

## Дауаханаға йөрөргә яратмаһаң...

дауахана һинә үҙе килә



8-9

## "Урал батыр" эпосы...

утыҙ телдә яңғыраны



15

ТВ-программа 14


***Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 2020 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылырға һуңлаған таныштарығыҙға хәбәр итегеҙсе: улар республиканың һәр ауылында, ҡалаһында 17 февралгә тиклем яҙылып, гәзитебеҙҙе марттан алдыра башлай ала. ПР905 индекслы "Киске Өфө" дүрт айға 450 һум 68 тингә төшәсәк. Бергә булайыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Быйылғы Тораҡ биләмәләре эстетикаһы йылында ҡасаба һәм ауылдарҙы төҙөкләндергәндә милли биҙәктәр ҙә ҡулланырға кәңәш ителде. Ошо бурысты нисегерәк күҙаллайһығыҙ һәм был йүнәлештә ниҙәр эшләргә кәрәк тип уйлайһығыҙ?

***Рафик ХИСМӘТОВ, Әбйәлил район хакимиәтенең архитектура һәм ҡала төҙөлөшө бүлеге начальнигы:*** Үҙебеҙ йәшәгән биләмәләр йөҙөнә милли колорит биреү, башҡарылған биҙәү-ғәмәли сәнғәт өлгөләрен күберәк һәм ҡыйыуыраҡ файҙаланыу бик урынлы һәм күптән кәрәк мәсьәлә. Дөрөҫөн әйткәндә, был хаҡта беҙгә әйткәнде, ҡушҡанды көтөп тороу ҙа кәрәкмәй ине, был беҙҙең асылыбыҙҙан, үҙлегебеҙҙән сығып башҡарыла торған эш бит. Төҙөк һәм матур булыуҙарына ҡарамаҫтан, әлегә мин бер ҡайҙа ла ошондай рухта өлгө итеп ҡуйырлыҡ ауылдарҙы күргәнем юҡ. Дөрөҫ, ауылдарға килеп ингән ерҙә уларҙың башҡортса атамалары һәм сәләмләү һүҙҙәре яҙылған баннерҙар ҡаршылай-ҡаршылауын, тик был ғына етмәй, минеңсә. Әбйәлилдә, әйтеүемсә, ауылдар нигеҙҙә матур һәм төҙөк, ләкин улар йөҙөнә әлеге милли колорит өҫтәү буйынса быйыл байтаҡ эштәр башҡарырға мөмкинлек бар. Мәҫәлән, күп урындарҙа кәртәләүҙәр төрлө материалдан һәм төрлөсә эшләп ҡуйылған. Шуларҙы берҙәм формаға килтереп, башҡорт орнаменттары менән биҙәү йә тәбиғәт күренештәрен төшөрөү, башҡорт шағирҙары әҫәрҙәренән өҙөктәр яҙып ҡуйыу бик тә урынлы булыр ине. Бынан тыш, газондар, сәскә түтәлдәрен эшләгәндә лә фантазияға урын күп. Һуңғы йылдарҙа районда, шул иҫәптән Асҡарҙа, ғөмүмән, төҙөкләндереү эштәре йәнләндерелде. Целинный һәм Хәмит ауылдарында күперҙәр ремонтланды, Әбделғәзелә, Таштимерҙә урамдар яҡтыртылды, Йәнгелдә быуа һәм йылға тирәләре төҙөкләндерелде, байтаҡ ауылдарҙа клубтар ремонтланды. Клуб, тигәндән, район үҙәге Асҡарҙа ла күптән түгел реконструкциянан һуң бына тигән мәҙәниәт һарайы ишектәрен асты. Уның тышҡы йөҙө, айырыуса фасад өлөшө милли колорит рухында биҙәлгән: бинаның тап "маңлай" тапҡырында таҡыя баш ҡурайыбыҙ балҡый. Башҡорт орнаменты булған ҡусҡар биҙәктәр сәнғәт символы арфа һынланышын хасил иткән. Асҡарҙа бындай йүнәлешкә иғтибар бар һәм әйтергә кәрәк, беҙҙең район үҙәге йәмле һәм төҙөк булыуы менән айырылып тора. 2015 йылда Асҡар Бөтөн Рәсәй конкурсында 5 мең һәм унан күберәк кеше йәшәгән ауылдар араһында "Рәсәйҙең иң төҙөк тораҡ биләмәһе" тип танылды һәм Дипломға лайыҡ булды. Киләсәктә лә эште ошо кимәлдә, ошо йүнәлештә дауам итәсәкбеҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

## ҮҘЕБЕҘ ҘӘ ҒӘЙЕПЛЕ

**Яңы йылға ла аяҡ баҫтыҡ, имен-тыныс ҡына үтһен был йылыбыҙ тип теләргә генә ҡала. Үтеп киткән оҙайлы ял көндәрендә күҙгә эленгән һәм күңелде өйкәп торған бер нисә күренеш тураһында ошо рубрикала әйтеп үтергә тип ҡулыма ҡәләм алдым.**

...Республикала йәйге һабантуйҙарҙа, мәктәп сығарылышы ваҡыттарында спиртлы эсемлектәр һатыуҙы сикләүҙәрен ҙур ризалыҡ менән ҡабул иттем. Яңы йыл ҡаршылау байрамдарын ҙур хәүеф менән көтөп йөрөй инем, ҡышҡы каникулдарға ҡарата ла ошондай уҡ ҡарар сығарылғас, тағы ла бер ҡыуандым. Күпселек бәләнең осо - эскелектә икәне менән берәү ҙә бәхәсләшмәҫ, тип уйлайым. Әлегә тиклем йылға һымаҡ ағылған был ағыуҙың юлын нисек булһа ла быуыу күптән хәл итеүҙе талап иткән ҙур мәсьәлә. Ошо йәһәттән эштең ҡыбырлауы үҙенең яҡшы һөҙөмтәләрен алып килмәй ҡалмаҫ. Мәҫәлән, мин йәшәгән күп фатирлы йортта эсергә яратыусылар ҙа, наркотик ҡулланыусылар ҙа етерлек. Әлеге байрамдар ваҡытында ҡарап торам да, магазиндан теләгән ваҡытта алып булмағас, ҡайһы берәүҙәр айыҡ ҡына йөрөп ятты.

**(Дауамы 2-се биттә).**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

**Ташҡа баҫылған һүҙҙең ҡөҙрәте ҙур икәнен бәләкәйҙән аңлатып үҫтерҙеләр. Заманында өйгә килгән тиҫтәләгән гәзит-журналдарҙы ҡәҙерләп-һаҡлап ҡына ҡат-ҡат уҡый инек. Ҡайҙа ти уларҙы туҙҙырып һалып ҡуйыу йәки йыртыу! Һәр баҫманың үҙенең тәғәйен урыны булды, алып уҡығас, кире урынына ҡуйыу мотлаҡ ине. Ә хәҙер бөтә нәмәнең ҡәҙере китте, бер көнлөккә әйләнде. Ләкин минең кеүек оло быуын кешеләре барыбер ҡулына ҡыштырлатып гәзит тотоп уҡымаһа, күңеле булмай. Шуға күрә әле булһа беҙҙең йортҡа республикала сыҡҡан гәзит-журналдар килеп тора.**

## ГӘЗИТЕБЕҘ МЕНӘН...

### бәхетлебеҙ һәм рәхмәтлебеҙ



**(Дауамы 3-сө биттә).**

12+

✓ *Аҡбирҙе менән Нуғай араһындағы юл ситтәрендә башҡортса Ҡөрьән сүрәләре, хәҙистәр яҙылған баннерҙар урынлаштырылған. Башҡа райондарҙың хакимиәт етәкселәре лә ошо матур өлгөгә эйәрһендәр ине.*



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ҮҘЕБЕҘ ҘӘ ҒӘЙЕПЛЕ

(Башы 1-се биттә).

...Төбәктә лә, баш ҡалала ла ҡар етәрлек быйыл - таҙартып ҡына өлгөр. Социаль селтәрҙәрҙә таҙартылмаған юлдар өсөн коммуналь хеҙмәт ойошмаларын ятлау кеше генә әрләмәй ҡалғандыр, биллаһи. Ә шул уҡ ваҡытта күп ҡатлы йорттарҙа йәшәүселәрҙең күбеһе ошо хәлдең ҡатмарлашыуына үҙе ғәйепле. Хәҙер һәр фатирҙа тиерлек икешәр еңел машина һәм уларҙың барыһы ла йорт алдындағы, артындағы, янындағы бөтә буш урындарға ҡуйыла - унда ҡар таҙалау түгел, хатта йөрөргә урын ҡалмай тиерлек. Ихатанан бер сәғәткә булһа ла машиналарын алып тороу үтенесе менән яҙылған иғланды бер кем дә күрмәй ҙә, белмәй ҙә, һәм тәбиғи, ундағы ҡар таҙаланмайынса ҡала. Был осраҡта кем ғәйепле һуң? Әлбиттә, ошо йортта йәшәүсе автомобиль хужалары. Үҙебеҙҙең моңһоҙлоҡ бөтмәйенсә, кемгәлер бөтә ғәйепте япһарып, йәшәп тик ятылыр микән ни?

...Моңһоҙлоҡ тигәндән, тәғәйенләнмәгән урындарҙан балаларын алып тороу тюбинг, сана һәм башҡа ҡулайламаларға ултыртып шыуҙырып еберҙән ата-әсәләргә лә аптырайым. Йыл да шул уҡ хәл ҡабатлана. Әллә күпме йәрәхәтләнеүсе һәм хатта һәләк булыусылар тураһында әйтеп-белдереп торалар, ләкин үҙҙәренең һәм яҡындарының хәүефһеҙлеген ҡурҡыныс аҫтына ҡуйыусылар һаны кәмемәй. Ошондай аңламағандарға ҙур күләмдә штраф һалыу кәрәктер, бәлки, сөнки беҙҙең халыҡ кеҫәһенә һуҡһа ғына төшөнә.

...Бынан тиҫтә йыл элек кенә беҙ бөтә ҡағыҙ эштәрен дә бер урында башҡарыу мөмкинлеге тураһында хатта хыяллана ла алмай инек. Белешмәләр артынан әллә күпме ойошма һәм учреждениеларға йөрөү, оҙайлы сираттарҙа тороу ғәҙәти хәл булды. Ә бөгөн иһә бөтәһен бер урында - күп функциялы үҙәктәрҙә - эшләү мөмкинлеге бар һәм был бик тә уңайлы. Ә ҡабул итеүгә алдан уҡ яҙылһаң, бөтөнләй сират көтөп тормайынса, тәғәйен ваҡытҡа килеп кенә тороу мөһим. Шул уҡ ваҡытта был өлкәлә лә барыһы ла яҡшы, тип әйтеп булмай. Мәҫәлән, ҡайһы бер министрлыҡтар һәм ойошмалар менән был үҙәктәр араһында бәйләнеш бөтөнләй юҡ. Һәм, иң ҡыҙығы, улар был хаҡта үҙҙәре лә белмәй кеүек, сөнки бер яҡ икенсе төрлө мәғлүмәт бирә, тейешле хеҙмәт алыу өсөн үҙәккә ебәрһә, унда иһә был хаҡта ләммим. Ошо рәүешле ике ойошма араһында йүгереүселәр бихисап. Шулай уҡ ике дәүләт ойошмаһы араһында үҙ-ара мәғлүмәт менән бүлешеү тураһында күптән иғлан ителһә лә, ҡайһы бер учреждение хеҙмәткәрҙәре әле булһа белешмәләр артынан халыҡтың үҙен йөрөтә. Шулай итеп, бер белешмә алыр өсөн генә төпкөл ауылдан әллә күпме саҡрымдар үтеп район үҙәгенә барырға мәжбүр була кеше. Ә урындағы белгескә ошо уҡ белешмәне алыр өсөн компьютерында бер нисә генә төймәне баҫыу ҙа етә. Кешелеклерәк булайыҡсы, тип өндәшкем килә. Шулай ҙа аяғыбыҙға көс төшөүгә үҙебеҙҙең дә ғәйеп бар, сөнки үҙ хоҡуғыбыҙҙы белеп етмәйбеҙ, белгән хәлдә лә талап итә алмайбыҙ, күп урында ауыҙ йомоп ҡалыуҙы хуп күрәбеҙ.

**Фәрзәнә СОЛТАНҒОЛОВА.**
**Салауат ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Быйылғы Тораҡ биләмәләре эстетикаһы йылында ҡасаба һәм ауылдарҙы төҙөкләндергәндә милли биҙәктәр ҙә ҡулланырға кәңәш ителде. Ошо бурысты нисегерәк күҙаллайһығыҙ һәм был йүнәлештә ниҙәр эшләргә кәрәк тип уйлайһығыҙ?

(Башы 1-се биттә).

***Гөлсибәр ЙӘНБӘКОВА, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Эшем буйынса бик йыш юлда йөрөргә, республикабыҙ райондарында булырға тура килә. Электән күңелде борсоп, иғтибар үҙәгендә торған мәсьәлә ул ауылдарыбыҙ йөҙө. Быйыл был темаға баҫым яһалыуҙы бик урынлы тип иҫәпләйем, сөнки төҙөк, күркәм ауылдарыбыҙ араһында, үкенескә, был йәһәттән иғтибар бирелеп еткерелмәгән биләмәләр ҙә етерлек. Айырыуса бөгөн "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһында күтәрелгән йүнәлештә башҡараһы эштәр байтаҡ. Әлеге әйткән төҙөк кенә ауылдарҙа ла хатта йәшәгән, көн күргән биләмәләребеҙҙең милли йөҙө хаҡында ошоға тиклем әллә ни уйланып барманыҡ һымаҡ, ҡайһы бер ерҙәрҙә ауыл исемдәре, башҡа төр атамаларҙы ла фәҡәт рус телендә яҙып ҡуйыу менән сикләнә башланыҡ. Йәшәгән биләмәбеҙ - беҙҙең йортобоҙ ул. Һәр хәлдә, мин үҙем, мәҫәлән, фатирымды тап шундай рухта йыйыштырып ҡуйҙым: иҙәндә - башҡорт балаҫы, стенала - уҡһаҙаҡ, байрамдарҙа ғына ҡәҙерләп кейә торған милли кейемдәр ҙә эленеп тора. Шуның кеүек, ауылдарыбыҙға килеп ингәндә лә йә улар янынан үтеп барғанда, бында үҙ төйәген яратҡан, милләтен ихтирам иткән башҡорттар йәшәй икән, тип уйларлыҡ булһын, тип әйтмәксемен. Мәҫәлән, Силәбе яғынан Иглин биләмәһенә килеп ингәндә, күңел йылынып, рәхәт булып китә: бында юлаусыны "Минең еремдә сәләмәт булып ҡуйыу!" тигән башҡортса-русса яҙыу ҡаршылай. Был яҙыуҙы замаһында Иглин район башлығы булып эшләгән сағында Ришат Сәлмән улы Исхаҡов яҙҙырып элдергәйне. Унан тыш, район биләмәһенең төрлө урындарына шунда йәшәгән халыҡтарҙың ырыу тамғаларын да ҡуйып сыҡҡайнылар. Иглин районы биләмәһендә тағы бер күңелде хушландырған күренеш күҙгә салына: Аҡбирҙе менән Нуғай араһындағы юл ситтәрендә башҡортса Ҡөрьән сүрәләре, хәҙистәр яҙылған баннерҙар урынлаштырылған. Башҡа райондарҙың хакимиәт етәкселәре лә ошо матур өлгөгә эйәрһендәр ине. Яҙыусыларыбыҙ, халыҡ шағирҙары әҫәрҙәренән, "Урал батыр" эпосынан өҙөктәр, "ҡанатлы" һүҙҙәр, "Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә" серияһынан мәҡәлдәр, әйтемдәр яҙып ҡуйыу ҙа бик фәһемле, урынлы булыр ине. Ауыл, ҡала биләмәләрен төҙөкләндереү эшен быйыл йәй Өфөлә үтәсәк Бөтөн донъя фольклориада ваҡиғаһына йүнәлеш тотоп башҡарырға кәрәк, тигән фекерҙәмен.

***Илгиз ЙӘНБИРҘИН, Баймаҡ районы Ярат ауыл хакимиәте башлығы:*** Был мәсьәләгә беҙҙә электән үк иғтибар бирелеп килә. Иң мөһиме бында, минеңсә, әсә телебеҙгә ихтирам билдәһе алға ҡуйылырға тейеш. Һәм беҙҙә ул ауыл ҡапҡаһынан уҡ башлана: матур итеп башҡорт телендә юлсыларға, ҡунаҡтарға, ауылдаштарға сәләмләү һүҙҙәре, шулай уҡ ауылыбыҙ исеме лә үҙ телебеҙҙә яҙып ҡуйылған; был алтаҡталарҙың ситтәрен милли орнаменттар ҡаймалаған. Ярат ауыл хакимиәте биләмәһенә ҡараған Ғүмәр, Йәрмөхәмәт ауылдарында ла шулай. Был йәһәттән район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Ришат Вәкил улы Ишембәтов айырыуса талапсанлыҡ күрһәтә һәм мәсьәләне ныҡ контролдә тота. Шулай булырға тейеш тә, сөнки туған телебеҙгә ихтирам беҙҙең үҙебеҙҙән башланырға тейеш. Биләмәгә милли колорит өҫтәүсе тағы бер матур объект - ауылға ингән ерҙә генә "Койо башы" бар. Ябай ғына ҡоҙоҡ түгел ул, ә бик үҙенсәлекле мәғәнәгә эйә. "Койо башы"н беҙ боронғо милли йолабыҙҙы - килендәргә һыу башлатыу йолаһын башҡарыу өсөн файҙаланабыҙ. Һәм, әлбиттә, ҡоҙоҡ заманса, бик матур итеп көртәләп алынған, биҙәлгән. Ситтән төшкән килендәр, туй ҡунаҡтары, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар бында халыҡ традицияларын ихтирам иткән илһөйәрҙәр йәшәй, тимәк, бында тәртип бар икәнен күрһендәр. Килендәрҙең дә иң бәхетле ғүмер мәлдәре ошоға бәйле хәтерҙәрендә уйылып ҡалһын. Йәшелләндереүгә лә беҙҙә иғтибар ҙур. Элекке К.Маркс исемендәге колхоздың ветерандары ошо хужалыҡтың 90 йыллыҡ юбилейына йыйылып, һәр береһе үҙ исеменән ағас ултыртып сыҡҡайны, хәҙер бына тиган аллея шаулап үҫә. Шулай уҡ Ҡоролтай аллеяһы ла бар әле беҙҙә, ул 2018 йылда Яратта булып үткән район ҡоролтайының күсмә ултырышы хөрмәтенә ултыртылғайны. Еңеүҙең 75 йыллығын ҡаршылап, Бөйөк Ватан һуғышында баш һалған ауылдаштарыбыҙ иҫтәлегенә ҡуйылған обелиск та яңыртып төҙөлдө. Әйтеп китеүемсә, бөтөн ерҙә лә алтаҡталар тексы, сәләмәт тормошҡа саҡырыусы баннерҙағы өндәмәләр барыһы ла башҡортса-русса яҙылған. Милли биҙәктәр, орнаменттарҙы файҙаланыуға килгәндә, уларҙы мөмкин булғанса файҙаланабыҙ, тик бында сама ла белергә кәрәк, тип уйлайым. Артыҡ сыбарлау, һәр бер ергә биҙәк һалып сығыу әллә ни килешеп бөтмәҫ һымаҡ. Эш бит биҙәкләп сығыуҙа ғына түгел, йөкмәтке лә кәрәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ӨС ӨЛӨШКӘ БҮЛГЕЛӘНГӘН

**Йәмғиәт өскә бүленгән. Бер өлөшөндә уйлағанын ярып әйтерлек, теләгәнен ғәмәлгә ашырырлыҡ көскә, мөмкинлеккә эйә булғандар йәшәй. Улар бер нигә ҡарамай бәхетле. Бәлки, үҙҙәре лә аңлап етмәйҙер, әммә бәхетле.**

Йәмғиәттең икенсе өлөшөндә төрлө ҡалыптарға, ҡыҫымдарға, эшләгән эше, түрәләре ҡуйған талаптарға буйһоноп йәшәүселәр. Уларға (бик һирәктәренән тыш) ысын мәғәнәһендә ҡыйын. Һәр һүҙҙе уйлап, тирә-яғына ҡаранып, ҡулағәнән ҡурҡып йәшәүе еңел түгел. Был ике өлөштәгеләр аратирә бер-береһенә күсеп ала. Беренсе өлөшкә икенсе өлөштән, ғәҙәттә, хаҡлы яҙға сыҡҡандар, йә булмаһа, эш урынһыҙ ҡалғандар күсеп тора. Икенсе өлөшкә беренсе өлөштән эш тапҡандар, балаларына эш табылғандар күсә. Шулай уҡ оло тормошҡа аяҡ баҫҡан йәштәр тапҡыр бында эләгә. Мин ошо ике өлөштә лә булдым. Дөрөҫөн әйткәндә, икенсе өлөшөндә булғанда, һин беренсе өлөштәнме әллә, тиғән һорау биреүселәр булды.

Ә йәмғиәттең өсөнсө өлөшөндәгеләр иһә - битарафтар. Битарафтарға йәмғиәттә ҡараш төрлөсә. Ә минең уларға бер ниндәй ҙә ҡарашым юҡ. Сөнки ул өлөштә бер тапҡыр ҙа булманым...

**Наилә ХӘМБӘЛИЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров райондарҙағы чиновниктарға Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының йәшәү шарттарын тикшерергә, ветерандарға ярҙам итергә ҡушты. Шулай уҡ "Эстетика йылы" сиктәрендә тораҡ пункттарҙа тәртип урынлаштырыу, һәрби мемориалдар һәм ҡәберлектәр менән эшләү кәрәклеген иҫкә төшөрҙө.

✓Инесса Косолапова Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнде, тип хәбәр итә ведомство. Республика Башлығы тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Бынан алда Инесса Косолапова Башҡортостан Республикаһы Мәғарифты үҫтереү институтының Республика мәғариф системаһы ресурс үҙәге директоры вазифаһын биләне. Уҙған йылдың аҙағында "Башҡортостандың йәш лидерҙары" республика кадрҙар конкурсында ҡатнашып, еңеүсе булды.

✓Башҡортостандың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры вазифаһын башҡарыу министр урынбаҫары Наталья Полянскаяға йөкмәтелде. Республика Башлығы Радий Хәбиров тейешле указға ҡул ҡуйҙы. Башҡортостан Башлығының икенсе указы менән Гөлшат Арыҫланова, икенсе эшкә күсеүе сәбәпле, республиканың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры вазфаһынан бушатылды.

✓Республиканың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин Башҡортостандың Мәғарифты үҫтереү институты коллективын яңы етәксе менән таныштырҙы. Иҡтисад фәндәре докторы Азат Йәнгиров Башҡортостан Республикаһының Мәғарифты үҫтереү институты ректоры вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Бынан алда Мәғарифты үҫтереү институтына Башҡортостандың элекке мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова етәкселек иткәйне. 2020 йылдың ғинуарында ул был вазифаны ҡалдырҙы.

✓Башҡортостанда тораҡ пункттарҙа үҙәкләштерелгән һыу үткәргес төҙөү планлаштырыла. Проекттарҙы 335 миллион һумға адреслы инвестиция программаһы сиктәрендә республика бюджеты финанслай. Шулай уҡ ағымдағы йылда һыу менән тәьмин итеү объекттарын төҙөү һәм реконструкциялау өсөн 1 миллиард һумдан ашыу тотонола - адреслы инвестиция программаһы аҡсаһынан тыш, был суммаға "Таҙа һыу" төбәк проекты (329 миллион һум) һәм коммуналь ойошмалар (361 миллион һум) аҡсаһы инә.

✓ *Бөгөнгө матурлыҡ конкурсы машина алыуҙан бер нәмәһе менән дә айырылмай. Ҡатын-ҡыҙҙы әйбер итеп ҡарауҙың бер формаһы ғына. Әйберҙән нимә талап ителә? Хеҙмәт итеү. Хеҙмәт итә алмаған хәлдә, уның кәрәге лә бөтә.*



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

**Шаулап-гөрләп төрлө кимәлдәрҙәге "Һылыуҡай" бәйгеләре үтә. Бөгөн был конкурсты балалар баҡсаһынан башлап, донъя даирәһе кимәлдәренә тиклем үткәрәләр. Экрандарҙы, баҫмаларҙы сибәр ҡыҙҙарҙың йөҙ-һыны биҙәй, кемдәрҙең ниндәй енеүҙәр яулап, нимәләргә эйә булыуы тәфсирләп яҙыла. Һәм, әлбиттә, бөтөн был күренештәр үҫеп килгән йәш сибәркәйҙәргә оло уңыш, таңға инер татлы төш, хыялға илтер юл булып күренә. Улар ҙа, киләһе йылға тағы нисәләр сантиметрға үҫә төшһә, ни һындарылыр тағы ла йоморолана, ҡалҡа төшһә, конкурста ҡатнашыу бәхетенә өлгәшә аласаҡтар...**




# МАТУРЛЫҠ ТУЙҘА КӘРӘК

"Һылыуҡай" республика конкурсы - Рәсәйҙә оҙаҡ һәм бай тарихҡа эйә булған берҙән-бер милли заманса проект", тип яҙҙыҡ әле беҙ ҙә үҙебеҙҙең гәзиттә. Әлбиттә, был, бер яҡтан, хаҡлы ла фекер. "Оҙаҡ һәм бай тарихҡа эйә булған" был сара ҡатнашыусыларынан артыҡ хеҙмәт, аҡыл һәм һәләт талап итмәй. Ул шуныһы менән ҡатнашыусыларҙы арбай ҙа. Кешене баһалауҙың иң анһат бер юлы. Бынан анһатыраҡ һәм арзаныраҡ баһалау кимәле юҡ. Булмаған да.

Ҡатын-ҡыҙҙың матурлығы (тышҡы матурлығы) борон-борондан, хатта кешелек барлыҡҡа килгәндән башлаптыр, иғтибарға лайыҡ булған. Сибәркәйҙәрҙе ҡулға төшөрөү өсөн ир-ат араһында ғына түгел, ҡәбиләләр, илдәр араһында ла ыҙғыштар ҡупҡан. Яулап алынған матур ҡатын тик бер хужаға (иргә) ғына тәтегән. Тик... Ошонда бер ҡыҙыҡ ҡына "тик" килеп сыға. Күп халыҡтарҙа (гректарҙа, япондарҙа, көнсығыш халҡында) борон шул матур ҡатын иренә хыянат итеүҙә йәки башҡа тәртип боҙоуҙарҙа ғәйепләнә икән, уны йәки ире үлтергән, йәки башҡа ирҙәр хөкөмөнә сығарған. Йәғни, ул ирҙәр алдында йөрөгән, һәләттәрен күрһәткән, кемдер уны һайлап алһын өсөн тырышҡан. Әгәр уны кемдер "бик сибәр һәм йәшәүгә хаҡлы" тип иҫәпләһә, баһаһын хаҡ менән белдергән һәм үҙенә алған. Унан ҡала, ҡатын-ҡыҙ ҡоллоҡҡа алына, тауар итеп һатыла башлағас, ҡол һатыусылар шундай уҡ уйынды тергеҙә. Ҡол ҡыҙҙарын үҙҙәрен юғарыраҡ һатыу алымдарына күнектерәләр. Бының өсөн махсус кешеләр яллап, уларҙы йырларға-бейергә, музыка ҡоралдарында уйнарға һәм башҡа нәзәкәтлектәргә өйрәтәләр. Унан инде был кәнизәктәр, байыраҡ һатып алыусылар йортона эләгеү өсөн, йөҙҙәренең, боттарының, сәстәренең матурлығын башҡаларҙыҡынан артығыраҡ итеп күрһәтергә тырыша. Һәм уны ана шул күрһәткестәренә ҡарап баһалайҙар ҙа. Бына! Матурлыҡ конкурсының иң төп нигеҙе ошо ҡырағай йолала ята...

Бөгөн был йола әкиәт кенә, хәҙер барыһы ла икенсе, тиерҙәр. Шулайҙыр. Әммә кеше психологияһы шул кеше булыуҙан артыҡҡа үҙгәрә алмай бит ул. Унда шул уҡ тойғолар, шул уҡ башланғыстар ҡала килә. Һаман да ҡатын-ҡыҙҙың тышҡы матурлығы баһалана. Һаман да әле кешенең аҡыл кимәле тышҡы күренешкә бәйләнеү кимәленән үтә, юғарыраҡ үҫешә алмай. Шул ғына.

Берәүгә лә йөҙ-төҫөн һайлау хоҡуғы бирелмәгән. Ата-әсә тыуасаҡ балаһының төҫ-башына йоғонто яһай алмай. Хоҙай тарафынан матур итеп яратылған ҡыҙ бала үҙенең сибәрлеген белеп үҫә. Уға был хаҡта бәләкәйҙән әйтәләр. Бигерәк тә оло ҡатын-ҡыҙ быны һыҙыҡ өҫтөнә алып, баланы осондороп ебәрергә ярата. Бала матурлығын башҡаларҙан өҫтөн булған фиғеле икән тип уйлай, ул бының бары тышҡы төҫ, бында үҙенең бер тырышлығы ла, хеҙмәте лә юҡ икәнлекте аңламай. Һәм, матурлыҡ конкурсына ағылған ҡыҙҙарыбыҙҙың һаны күрһәтеүенсә, ҙурайғансы ла төшөнмәй әле. Ошо өҫтөнлөк хисе киләсәктә (ҡайһы бер осраҡта) уны бәхетһеҙ итергә лә мөмкин. Ҡыҙ бындай сибәрлек менән, мин күпкә дәғүә итә алам, мине тик яратырға, ҙурларға ғына тейештәр, тип уйлай. Һайлаған ишен дә һанламай, бынан да шәберәге табылырға тейеш, тигән фекере бары менән ҡәнәғәт булырға форсат бирмәй. Тышҡы матурлығына тормоштан хаҡ талап итә, нәфсеһе аҙа, әммә тормош та, ҡояш та, яҙмыш та, хатта кешеләр ҙә төҫкә ҡарап бер нәмәне лә хәл итмәй, һин матур тип артығыраҡ яратмай, өҫтөн күрмәй, нығыраҡ йылытмай шул ул.

Бөгөн Рәсәйҙә балалар араһында матурлыҡ конкурстарын тыйыу тураһында һүҙ бара, ниһайәт, был эштең бала психологияһына зыян килтереүсе фактор булыуын аңлай башланылар, ахыры. Уйлап ҡарағыҙ, балалар баҡсаһына йөрөгән сабыйын тышҡы матурлығына ҡарап баһалау ололар ғоманһыҙлығының иң мәғәнәһеҙе түгелме ни? Ә ул енеүсе һәм енеүсе була алмаған балаларҙа тыуған яңылыш эмоцияларҙы ғына алып ҡарағыҙ...

Бөгөнгө матурлыҡ конкурсы ат һайлап алыу йәки машина алыуҙан бер нәмәһе менән дә айырылмай. Ҡатын-ҡыҙҙы әйбер итеп ҡарауҙың бер формаһы ғына. Әйберҙән нимә талап ителә? Хеҙмәт итеү. Хеҙмәт итә алмаған йәки боҙолған хәлдә, уның кәрәге лә бөтә. Был шундай механизм, уны ебәргән хәлдә, туҡтатып та булмаясаҡ.

Әлбиттә, Рәсәй сибәркәйе Оксана Федорованың уңышлы яҙмышы күп ҡыҙҙарҙы ҡанатландырҙы. Әммә, әйтеп үтергә кәрәк, Оксана эшләгән карьераны, унан күпкә юғарыраҡты, сибәр үк түгел, тик аҡыллы булған башҡа йөҙәрләгән, меңәрләгән ҡыҙҙар ҙа эшләй. Оксана үҙе Эске эштәр министрлығы хеҙмәткәре һәм уның ире лә хәрби офицер, был күрһәткестәр күп нәмәне хәл иткәндер ҙә. Бөгөн был сибәр ҡатын ике бала әсәһе булып ғәҙәти тормош алып бара, ә ниндәйҙер илдең ханбикәһе булып ултырмай. Был беҙ ҡараған бәхетле осраҡ, ә бәхетһеҙҙәре һанап бөткөһөҙ. Матурлыҡтарын күрһәтергә ынтылған ҡыҙҙар утҡа осҡан күбәләктәр ише янып ҡолап тора, улар урынына яңылары үҫеп етеп тора. Залдан боттарын ялтыратып үтеүҙән килгән уңыш уларҙы шул хәтлем арбаймы, улар бының зыяны, әхлаҡһыҙ яҡтары күберәк икәнде уйларға ла теләмәй...

...Былтырғы һылыуҡайҙар конкурсы башланып, уҡыу йорттары студенттары ҡайнаша башлағас та, ҡыҙымды уҡыу йортонан ошо бәйгегә һайланылар. Мин быны ишеткәс, һағайып ҡалдым, әммә өндәшмәнем. Уның ҡарашын белгем килде, нисек хәл итер, тип уйланым. Бер көн әйтә: "Декан саҡыртты, бәйгелә университет исеменән ҡатнашһаң, магистратураға бюджетҡа урын биреләсәк", - тине, ти. "Шунан?" тим. "Шул, баш тарттым". "Ниңә?" Ҡыҙым көлөп ебәрҙе: "Матурмын, тип, конкурста ҡатнашып йөрөмәйем инде..." Көлөшөп алдыҡ.

Матур ҡыҙҙар күп тә ул. Ҡарап торһаң, һәр икенсе ҡыҙҙы һылыуҡай итеп ултырт. Тик улар тышҡы йөҙҙәре буйынса һайлауҙы теләмәй, ҡайһылар өсөн эске йөкмәтке, күңел матурлығы өҫтөнөрәк. Шундай ҡыҙҙарыбыҙ, ҡыҙҙарына башҡа төрлө донъяуи матурлыҡтарҙы һеңдереп үҫтерә белгән ата-әсәләр күберәк булһын ине.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# ГӘЗИТЕБЕҘ МЕНӘН...

## бәхетлебеҙ һәм рәхмәтлебеҙ

**(Башы 1-се биттә).**

Шулар араһында ҡулыма иң тәүҙә "Киске Өфө"нө алам. Шәмбе көнө төшкә ҡарай хат ташыусыны көтә башлайым, ул килеп гәзиттәрҙе ҡуйып киткәс үк сығып ала һалам. Гәзит шәхсән миңә нимәһе менән оҡшай? "Киске Өфө", гәзит һаны тулһа булды, тип эшләмәй, уның һәр мәҡәләһе, хатта бер нисә юллыҡ ҡына яҙмаһы ла, гәзит уҡыусыны уйландыра, теге йәки был тема буйынса фекер төйнәргә ярҙам итә. Бөгөнгө көндә барған хәл-ваҡиғаларға аңлайышлы анализ эшләй авторҙар, шул уҡ ваҡытта уны үҙеңә артабан да үҫтереп, донъя яңылыҡтары тураһында, бөгөнгө йәшәйешебеҙ хаҡында уйланырға этәргес бирә.

Донъяуи мәсьәләләргә, бөгөнгө замандаштар тормошон һәм эшмәкәрлеген яҡтыртыуға, халҡыбыҙҙың тарихын ентекләп өйрәнеүгә этәреүсе мәҡәләләре менән баһалы "Киске Өфө". Тәү ҡарашҡа бәләкәй генә булып күренгән күренеште лә шундай мәғәнәле, әһәмиәтле, уҡымлы итеп бирә редакция хеҙмәткәрҙәре, бөтә күңелде биреп уҡыйһың. Тағы шуны билдәләгем килә: ҡоролоҡ юҡ гәзит битендә, һәр мәҡәлә "һутлы" тел менән яҙыла.

Ошо йылдар эсендә башҡорт мәҙәниәтен, сәнғәтен үҫтереүгә ҙур көс һалыусылар тураһында мәҡәләләр баҫылды гәзиттә. Беҙ өҫтән генә белгән тарихыбыҙҙы "сәйнәп ҡаптырыусы" тарихсыларыбыҙ менән әңгәмәләр эшләнде "Киске Өфө"лә. Ең һыҙғанып эшләп йөрөүсе, эшҡыуарлыҡ тигән өлкәлә үҙҙәрен киң танытып өлгөргән һәм аяҡтарында ныҡ баҫып тороусы егет һәм ҡыҙҙарыбыҙ тураһында хәбәрҙар булдыҡ баҫма биттәренән уҡып. Табип, юрист, уҡытыусы һәм башҡа һөнәр эйәләре менән тәфсирләп эшләнгән интервьюлар уҡып, был тармаҡтарҙың үҙенсәлектәренә төшөндөк. Телевизор экрандары аша ғына күреп-белгән сәйәсмәндәр һәм депутаттар менән эшләнгән мәҡләләрҙе уҡып, үҙебеҙҙе ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуаптар таптыҡ.

Милли рухҡа баҫым яһаған, башҡортто берләштереүсе, аралаштырыусы, уны бөтә яҡлап та ҡайғыртыусы гәзиткә тик уңыштар юлдаш булыуын теләйем. Беҙ, "Киске Өфө"нөң меңәрләгән гәзит уҡыусылары, ошондай баҫмабыҙ булыуы менән бәхетлебеҙ һәм уға рәхмәтлебеҙ.

**Марат СИБӘҒӘТУЛЛИН.**
**Күгәрсен районы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Роспотребнадзорҙың республика буйынса идаралығы Башҡортостанда грипп һәм ОРВИ эпидемияһының башланыуы тураһында хәбәр итте. Республика халҡы араһында киҫкен респиратор вирус инфекцияһы менән сирләү эпидемия сигенән 35,6 процентҡа юғарыраҡ. Мәктәп йәшендәге балалар араһында эпидемия сиге 31,9 процентҡа күтәрелгән. Роспотребнадзор идаралығы шәхси һаҡланыу саралары хаҡында хәтергә төшөрә.

✓Коронавирус башланыу сәбәпле, 1 февралдә Рәсәй менән Ҡытай араһында авиабәйләнеш сикләнде. Транспорт министрлығы авиакомпанияларға пассажирҙарҙы өйҙәренә ҡайтарыу өсөн Рәсәй ҡалаларынан Ҡытайға чартер рейстарын башҡарырға рөхсәт иткәйне. Хәҙер Рәсәй 14 февралдән Ҡытайға бөтә чартер авиарейстарын туҡтата. Ошо хаҡта Рәсәй Федерацияһы вице-премьеры, Рәсәй биләмәһенә коронавирус инфекцияһының инеүен һәм таралыуын иҫкәртеү буйынса штаб рәйесе Татьяна Голикова белдерҙе.

✓Мәскәүҙә Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының гастролдәре ҙур уңыш менән тамамланды. 1 февралдә Мәскәүҙең "Модерн" драма театрында "Башҡорт туйы" спектакле аншлаг менән үтте. 2 февралдә баш ҡала тамашасыһына Мостай Кәримдең повесы буйынса Бөйөк Ватан һуғышы осоронда башҡорт ауылына килеп эләккән Оксана исемле украин ҡыҙы тураһында "Беҙҙең өйҙөң йәме" спектакле күрһәтелде. "Милли йәштәр театрының гастролдәре "Урал батыр уттары" асыҡ төбәк-ара марафон барышында уҙҙы һәм Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына арналды.

✓Өфө үҙәгендә - Ҡунаҡһарай алдындағы майҙанда "Еңеүгә тиклем 100 көн" кире иҫәп стелаһын асыу тантанаһы уҙҙы. Стеланы асыу көнө осраҡлы һайланмаған. Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына тиклем йөҙ көнгә кире иҫәп тап 30 ғинуарҙа башлана. Стеланы асыу тантанаһы ошо бөйөк датаға арналған ҡала сараларына старт бирҙе. Тантаналы сарала Өфө ҡалаһы мэры Өлфәт Мостафин, Өфөнөң Киров районы хакимиәте башлығы Илвир Нурдәүләтов, Бөйөк Ватан һуғышы, хеҙмәт ветерандары ҡатнашты.

✓Республикала "Башархив.рф" тарихи-документаль проекты эшләй башланы. Өфө губернаһы буйынса 1917 йылғы ауыл хужалығы иҫәбен алыу материалдары - 5,7 меңдән ашыу документ тәүге тапҡыр интернетҡа һалынды. Был - үҙенең ғаиләһенең тарихы менән ҡыҙыҡһынғандар өсөн ҙур бүләк. Артабан "Башархив.рф" проектына башҡа тарихи документтарҙы ла индереү күҙаллана.

✓ *Башҡортостан быйыл ике аҙнаға үҙенсәлекле театрлаштырылған сәхнәгә әүерелəсәк. Унда донъяның 85 иленән килгән өс меңдән ашыу артист республика халҡын һәм ҡунаҡтарҙы үҙҙәренең сәнғәте менән таныштырасаҡ.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## БАЛАЛЫЛАРҒА...

**2020 йылдың 1 февраленән балалы граждандарға дәүләт пособиелары, шул иҫәптән бала тыуғас бер тапҡыр бирелә торған пособие, баланы йәш ярымға тиклем тәрбиәләгән өсөн айлыҡ пособиеларҙың минимал күләме, шулай уҡ йөклөлөктөң тәүге айҙарында уҡ медицина ойошмаларына иҫәпкә торған өсөн пособие индексацияланды.**

Быйыл уларҙың күләме 3 процентҡа арттырылды, тип хәбәр итә Социаль страховка фондының төбәк бүлексәһе. Хәҙер тәүге баланы йәш ярымға тиклем тәрбиәләгән өсөн айлыҡ пособиеның минималь күләме - 3882 һум 14 тин; икенсе һәм артабанғы балалар өсөн - 7764 һум 27 тин. Бала тыуғас ата-әсәгә бер тапҡыр бирелә торған пособие - 20 704 һум 74 тин. Йөклөлөктөң тәүге айҙарында табипка иҫәпкә торған ҡатын-ҡыҙҙарға түләнгән пособие 776 һум 42 тингә тиклем артты. Ерләү өсөн пособие ла индексацияланды - 7043 һум 59 тин.

## ҠАРТТАРҒА...

**1 февралдән Башҡортостанда федераль льготаға хоҡуҡлы 312 мең кешегә айлыҡ аҡсалата түләү күләме 3 процентҡа индексацияланды, тип хәбәр иттеләр Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһенән.**

Индексация күләме 2019 йылғы инфляция кимәленән сығып билдәләнде. Айлыҡ аҡсалата түләү составына ингән социаль хеҙмәттәр йыйылмаһы ла 3 процентҡа индексациялана. Хеҙмәттәр урынына аҡса алырға мөмкин. Быйыл 1 февралдән аҡсалата йыйылманың хаҡы айына 1155,06 һум тәшкил итә. Индексацианан һуң социаль хеҙмәттәр исемлеге түбәндәгесә була: дарыуҙар, медицина изделиелары һәм инвалид балалар өсөн махсус туҡланыу продукттары (аҡсалата - айына 889,66 һум); төп сирҙәрҙе иҫкәртеү өсөн шифахана-курорттарҙа дауаланыуға юлламалар (аҡсалата - айына 137,63 һум); ҡала яны тимер юл, шулай уҡ ҡалаара транспортында дауаланыуға бушлай барыу һәм ҡайтыу (аҡсалата - айына 127,77 һум).

## ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫ...

**Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй Президенты Владимир Путин үҙенең Федераль Йыйылышҡа мөрәжәғәтнамәһе йомғаҡтары буйынса Хөкүмәткә 2026 йылға тиклем әсәлек капиталын йыл һайын индексацияларға һәм беренсе балаға аҡса бүлергә йөкләмә бирҙе.**

Рәсәй Президенты сайтында баҫылған йөкләмәләрҙә ошо хаҡта һүҙ бара. Шулай уҡ Путин 2020 йылдың 1 ғинуарынан беренсе балаһы тыуған (уллыҡҡа алған) ғаиләләргә әсәлек капиталына хоҡуҡ бирергә ҡушты. Аҡсаның күләме 466 617 һум тәшкил итергә тейеш, ә ошондай ғаиләләрҙә икенсе бала донъяға килгән (уллыҡҡа алынған) осраҡта түләүҙең күләме 150 000 һумға арта. Әсәлек капиталын алмаған ғаиләләр өсөн 2020 йылдың ғинуарынан ғаиләлә икенсе бала тыуғанда ул 616 617 һум була. Был йөкләмәләр 2020 йылдың 15 апреленә хәтлем үтәлергә тейеш.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ЕРМЕ, АҠСАМЫ?

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары беренсе уҡыуҙа республикала ер мөнәсәбәттәрен көйләү тураһында ғәмәлдәге законға үҙгәрештәр индереүгә ҡағылышлы закон проектын ҡабул итте.**

Һуҙ шәхси йорт һалыу өсөн бушлай ер алырға хоҡуҡлы өс һәм унан күберәк балиғ булмаған бала тәрбиәләгән, шулай уҡ инвалид бала ҡараған ғаиләләргә 250 мең һум аҡса бүлеү хаҡында бара. "Закон проектына ярашлы, ишле һәм инвалид балалы ғаиләләр ер урынына 250 мең аҡса алырға мөмкин, - тине Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. - Бында иң мөһиме - "теләк буйынса". Ергә хоҡуҡлы бөтә ғаиләләр ҙә өй төҙөргә йыйынмай. Был осраҡта участкаға ҡарағанда аҡса ҡулайыраҡ. Икенсе яҡтан, беҙгә тейешле инфраструктура менән йыһазландырылған ер участкалары етешмәй. Әгәр льготаға эйә булғандарҙың бер өлөшө аҡсаны һайлаһа, был барыһы өсөн дә килешеп эшләнгән ҡарар булыр ине. Һәр хәлдә, һайлау - ерме йәки аҡсамы - ғаиләләр ҡарамағында ҡала". Башҡортостандың Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, хәҙер 15 меңдән ашыу ишле, шулай уҡ балиғ булмаған инвалид бала тәрбиәләгән ғаилә шәхси йорт һалыу өсөн бушлай участка алыуға сиратта тора. Уларҙың 6 меңдән күберәге Өфөгә тура килә.

## СПОРТТЫ ҮҪТЕРӘБЕҘ!

**Радий Хәбиров Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағында Физик культураны һәм спортты үҫтереү мәсьәләләре буйынса совет ойошторҙо. Тейешле указға 2020 йылдың 27 ғинуарында ҡул ҡуйылды.**

Документҡа ярашлы, совет һәм уның составы тураһында положение раҫланды. Был органға республика Башлығы үҙе етәкселек итә. Совет рәйесе урынбаҫары - Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте вице-премьеры Ирек Сәғитов, яуаплы секретарь - Башҡортостан Республикаһының йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Руслан Хәбибов. "Тарихи көн. Бик әһәмиәтле Указға ҡул ҡуйылды. Советҡа Олимпия һәм Паралимпия уйындары чемпиондары һәм призерҙары, спорт федерациялары етәкселәре, әйҙәүсе тренерҙар, Башҡортостан Республикаһының башҡарма власть органдары, урындағы үҙидара органдары, ғилми ойошмалар, киң мәғлүмәт саралары, йәмәғәт берләшмәләре һәм коммерцияға ҡарамаған ойошмаларҙың вәкилдәре инде, - тип яҙҙы спорт министры Фейсбуктағы сәхифәһендә. - Ошондай командала беҙ әһәмиәтле мәсьәләләрҙе хәл итербеҙ һәм республикала спортты үҫтереү өсөн шарттар булдырырбыҙ. Был беҙҙең өсөн физик культура һәм спорт өлкәһендә тағы бер алға китеш. Эшкә әҙербеҙ! Алға!".

## УҠЫТЫУСЫҒА...

**Федерация Советы Хөкүмәткә уҡытыусылар өсөн хеҙмәткә түләүҙең берҙәм системаһын булдырырға тигән мөрәжәғәт ҡабул итте, тип белдерҙе юғары палатаның матбуғат хеҙмәте.**

Әлеге ваҡытта төбәктәрҙә урындағы властар педагогтарҙың эш хаҡын үҙҙәре билдәләй. Һөҙөмтәлә ҡайһы бер өлкәләрҙә уҡытыусыларҙың төп оклады минималь хеҙмәт хаҡынан ике тапҡырға тиерлек аҙыраҡ. Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова һүҙҙәренсә, илдә уҡытыусыларҙың уртаса эш хаҡы 40 мең самаһы тәшкил итә. Төбәктәр буйынса айырма ҙур ғына - ҡайһы берҙәрендә уҡытыусыларҙың хеҙмәт хаҡы 22 мең һум булһа, Чукоткала иһә 100 мең тирәһе. Закон сығарыусылар уҡытыусыларға хеҙмәт хаҡын эшләгән сәғәттәр һанына, белем биреү программаһына һәм квалификацияһына ярашлы билдәләргә, дәртләндереүсе түләүҙәр системаһын һаҡлап ҡалырға тигән тәҡдим индерҙе. Лилиә Ғүмәрова әйтеүенсә, Президенттың медицина хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы буйынса берҙәм талаптар тураһында күрһәтмәһе бар, уҡытыусылар өсөн дә ошондай алымды ҡулланырға кәрәк. Тариф сеткаһына кире ҡайтыу хаҡында һүҙ бармай, тине сенатор.

## ФОЛЬКЛОРИАДА ЙӨРӘГЕ - ӨФӨЛӘ

**Быйыл баш ҡалабыҙ ҙур халыҡ-ара традицион мәҙәниәттәр фестивале - Бөтә донъя фольклориада ҡатнашыусыларын ҡабул итәсәк. Фольклор һәм традицион сәнғәттәр фестивалдәре ойошмаларының Халыҡ-ара Советы ойошторған был сара Голландияла, Японияла, Венгрияла, Көньяҡ Кореяла һәм Мексикала уҙғарылғандан һуң, ниһайәт, Рәсәйгә юллана. Ил тарихында ул тәүге тапҡыр һәм тап Өфөлә үтәсәк.**




Башҡортостан быйыл ике аҙнаға (18 июль-1 август) үҙенсәлекле театрлаштырылған сәхнәгә әүерелəсәк. Унда донъяның 85 иленән килгән өс меңдән ашыу артист республика халҡын һәм ҡунаҡтарҙы үҙҙәренең традицион музыкаһы, бейеүҙәре, халыҡ кәсептәре, аш-һыуы, милли кейемдәре һәм сәхнә сәнғәте менән таныштырасаҡ. Муниципаль берәмектәр, 10 зонаға берләштерелеп, һәр район һәм ҡала округтары үҙектәре үҙендә ҡунаҡтар ҡаршылаясаҡ. Майҙансыҡтарҙа концерттан тыш, күргәҙмә-йәрминкәләр, традицион уйындар ойоштороласаҡ, парад үтәсәк. Һәр илдең оҫталары үҙ кәсептәре менән таныштырасаҡ.

Өфөлә төп саралар "Өфө-Арена", "Ватан" этнопаркы, Ағиҙел йылғаһының яр буйы майҙансыҡтарында барасаҡ. Баш ҡаланың төньяҡ өлөшө өсөн төп майҙан итеп "Моторҙар эшләүселәр" Мәҙәниәт һарайы алды һайланған. Сараға әҙерлек эштәре күптән башланған һәм дауам итә. Ҡала хакимиәтендә ойошторолған эш төркөмөнөң сираттағы ултырышында мәҙәни программаларҙы ойоштороу, ҡатнашыусыларҙың һәм тамашасыларҙың хәүефһеҙлеген, уларҙы транспорт һәм медицина хеҙмәтләндереүе менән тәьмин итеү, ҡунаҡтарҙы урынлаштырыу мәсьәләләре ҡаралды.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда 2019 йылда майҙаны 2 372 мең квадрат метрлыҡ (2018 йылға +3,2%) 32 меңгә яҡын фатир төҙөлгән. Республика сафҡа индерелгән торлаҡ күләме буйынса Волга буйы федераль округында икенсе урында тора. Башстат мәғлүмәттәре буйынса, торлаҡтың 58 проценты халыҡ үҙ иҫәбенә йәки кредит ярҙамында һалған, был 12,5 мең шәхси йорт тигән һүҙ. Халыҡтың йән башына индерелгән торлаҡ майҙаны 1000 кешегә иҫәпләгәндә 587 квадрат метр тәшкил иткән.

✓Өфөлә Ғабдулла Туҡай исемендәге майҙан барлыҡҡа килеүе ихтимал. Ҡала Советы депутаттары президиум ултырышында ошо мәсьәләне ҡараны. Шағирға һәйкәл ҡуйылған Өфө "Нур" татар дәүләт театры янындағы майҙанға Ғабдулла Туҡайҙың исемен бирергә тәҡдим ителә. Был мәсьәлә эш комиссияһы ултырышының көн тәртибенә индерелә. Проекттар буйынса аҙаҡҡы ҡарарҙар 2020 йылдың 12 февралендәге ултырышта ҡабул ителергә тейеш.

✓Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры Пермгә гастролдәргә юллана. "Зөләйха күҙҙәрен аса" спектакле (Гүзәл Яхинаның шул уҡ исемле романы буйынса Ярослава Пулинович инсценировкаһы) 7 һәм 8 февралдә Пермь академия драма театры сәхнәһендә күрһәтелә. Гастролдәр "Урал батыр уты" төбәк-ара этник башкорт мәҙәниәте марафоны барышында ойошторола.

✓"Боронғо Өфө" музей-курсаулығы өфөләрҙе иҫтәлекле әйберҙәре менән бүлешергә саҡыра. "Һеҙгә һәм ғаиләгеҙгә ҡәҙерле булған иҫтәлекле әйберҙе музей-курсаулыҡҡа тапшырһағыҙ, ул музей экспонатына, Башҡортостан тарихының бер өлөшөнә әүерелер. Ҡиммәтле ҡомартҡыны музейға бүләк иткән тарихи мәл төшөрөлөп, "Сәләм" телеканалында күрһәтелә", - тип хәбәр итте акцияны ойоштороусылар. Белешмәләр өсөн телефон: 289-29-41.

✓Башҡортостанда 16 муниципаль берәмектә бассейны булған физкультура-һауыҡтырыу комплекстарын төҙөү буйынса республика программаһын тормошҡа ашырыу башланды. Тиҙҙән Ҡырмыҫҡалы районында һәм Межгорье ҡалаһында бассейндар төҙөү подрядсыһын билдәләү буйынса һатыулашыу ойошторола. Ведомствоның матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, ошо объекттар буйынса төҙөлөш-монтаж эштәре быйыл яҙ башлана. 2021 йылдың икенсе кварталында бассейндар төҙөүҙе тамамлап, файҙаланыуға тапшырыу күҙаллана.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Республикабыҙҙа Башҡорт теле йыйлы старт алды. Йылды ошолай нарыҡлау башҡа милләт халыҡтарын да "Башҡортса һөйләшегеҙ!" тип саҡырыу икән тип аңларға ярамағаны тураһында ла иҫкәртеп китәйек.*



ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# АСҠЫНДАР ӨЛГӨҺӨ



**Асҡын районы халҡының күпселеген унлар, балыҡсы, ҡыр-танып ырыуы башҡорттары тәшкил итә. Улар башлыса башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында һөйләшә. Оҙаҡ йылдар мәктәптәрҙә татарса уҡытыу һөҙөмтәһендә тел бер аҙ үҙгәргәндер, әлбиттә. Әммә өлкән быуында был диалекттың ысын өлгөһө барыбер һаҡланып ҡалған әле.**

Элегерәк Әмир ауылынан барыһы ла Абыҙәбей тип йөрөткән Шәмғезинан Әғзәмова тигән инәй менән бер нисә тапҡыр осрашып, әңгәмә ҡороп ултырырға тура килгәйне. Ул әҙәби башҡорт теленә яҡын телдә һөйләшә ине. Ислам дине, башҡорт халҡы тарихы, шәхестәр тураһында шул тиклем күпте белә, илай-илай Һөйәнтүҙ ваҡиғаларын да телгә ала ине. Һүҙ араһында минең әҙәби башҡорт телемә һоҡланыуын белдерә, беҙ бик үк әҙәби телдә һөйләшмәйбеҙ шул, тип ҡуя ине. Ҡыҙғаныс, Абыҙәбей менән һөйләшкәндәр яҙылған диктофон яҙмам юғалды, ә ҡағыҙға теркәмәгәнмен. Ғәҙәттә, әңгәмәләштәремде диктофонға ла яҙҙыра, блокнотҡа ла теркәй торғайным. Был юлы улай итмәгәнмен, сөнки инәйҙең бәйәне ауыҙ асып, шул тиклем ныҡ диҡҡәт һалып тыңлана торғайны бит...

Асҡын төбәгенә, Асҡын халҡына хөрмәтте ошо Абыҙәбей, коллегаларым Фәйрүзә Юнысова, Наилә Имаева, уҡыусы ғына саҡтан рухлы ҡобайырҙар яҙып, сәхнәләрҙә сығыш яһап йөрөгән, хәҙер инде район хакимиәте башлығы булып эшләгән Ришат Марат улы Дихин һәм оҙаҡ йылдар Асҡын районы хакимиәте башлығы булып хеҙмәт иткән Зәки Ильяс улы Насыров уятты, тием. Һәр командировкаға барған һайын халыҡ менән осрашыуҙарҙан һуң был хөрмәтем нығына ғына барҙы. Иң ихлас милләттәштәр йәшәй Асҡында. Ошо төбәктең ҡайһы бер райондарындағы ҡайһы берәүҙәр кеүек: "Без үзебез башкырт инде, тик телебез татарныкы", - тип әйтмәйҙәр бында, ихлас итеп: "Без - башкортлар", - тиҙәр. Бер ниндәй икейөҙләләнеү ҙә, сөсөләнеү ҙә юҡ...

Ошо ихласлыҡты тағы бер тойоп, ҡыуанып ҡайтылды был сәфәрҙән дә. Асҡындар "Айыҡ ауыл" конкурсына ла беренселәрҙән булып старт биргәйне, Башҡорт теле йылы сараларын да республикала беренселәрҙән булып башлап ебәрҙе. Тантаналы кисәгә минән башҡа Пермь крайы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе, шулай уҡ Асҡын районының илһөйәр, телһөйәр улы Рәсил Тимерғәзе улы Мөхәмәтйәнов та саҡырылғайны. Әлбиттә, йыйылыусылар алдында беҙ ҙә сығыш яһаныҡ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының сәләмен күндереп, тәғәйен кешеләргә уларҙың Рәхмәт хаттарын да тапшырҙыҡ. Әммә асҡындарҙың үҙҙәренең сығышы, әҙерләгән программаһы күңелгә шул тиклем хуш килде: улар бөгөн Башҡорт теле йылы сараларын нисек башлап ебәрергә икән, тип баш ватҡандар өсөн өлгөнөң дә өлгөһөн күрһәтте. Иң тәүҙә район хакимиәте башлығы Ришат Марат улы райондың хаҡлы ялға сыҡҡан һәм әле лә эшләп йөрөгән башҡорт теле уҡытыусыларын тәбрикләне. Шунан "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр республика бәйгеһе еңеүселәрен һәм уларҙы был бәйгегә әҙерләгән уҡытыусылар сәхнәгә саҡырылды. Шул рәүешле башҡорт телен өйрәнеү һәм үҫтереү кеүек яуаплы бурысты үҙ иңендә күтәреүселәргә лайыҡлы баһа бирелде. Балалар һәм өлкәндәрҙең илһөйәрлек менән һуғарылған йырбейеүҙәре алдынан бөтөн зал Асҡын башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Фәйрүзә Юнысоваға эйәреп, аяғүрә баҫып, Рәми Ғариповтың "Туған тел" шиғырын һөйләне...

Тағы бер күренеш рухландырҙы асҡындарҙың был сараһында. Тамаша башланыр алдынан район хакимиәте алдындағы майҙанда балалар һәм йәштәр башҡорт халыҡ уйындары ойоштороп, майҙан тотто. Бер урында арҡан тартыштылар, икенсе урында суҡмар ырғыттылар, өсөнсө урында традицион булмаған яндан уҡ атыштылар. Урындағы тренер Азат Муллахмәтов районда шулай уҡ "Мәргән уҡсы" клубы филиалын ойоштorған, клуб ағзалары республика ярыштарында ла ҡатнашып, призлы урындар яуларға өлгөргән.

Шулай итеп, республикабыҙҙа Башҡорт теле йылы старт алды. Йылды ошолай нарыҡлау башҡа милләт халыҡтарын да "Башҡортса һөйләшегеҙ!" тип саҡырыу икән тип аңларға ярамағаны тураһында ла иҫкәртеп китәйек. Был иң тәүҙә башҡорт халҡы вәкилдәренә үҙ асылын иҫенә төшөрөргә саҡырыу, балаларығыҙҙы туған телдән мәхрүм итмәгеҙ, тип иҫкәртеү. Ошо йылда үтәсәк сараларҙа ҡатнашып, күҙәтеп, башҡа милләт вәкилдәре лә үҙ туған телен һанларға өйрәнә икән, тимәк, дөйөм маҡсат тормошҡа ашырыла, тигән һүҙ. Шулай түгелме ни?..

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!



# КӨН ЯМАНЫ КИТЕР...

**"Тәбиғәт - ҡатын-ҡыҙ затынан, шуға ла ул көйһөҙ", тип яҙған ҡасандыр Максим Горький. Моғайын, ул хаҡлылыр, сөнки һуңғы ваҡытта тәбиғәт торошоноң нисек булырын да күҙалларға мөмкин түгел: йә ҡарһыҙ интектерә, йә ҡыш уртаһында ямғыр яуа, йә көтмәгәндә буранлап, бөтөн ерҙе тигеҙләп һылап ҡуя… Үтеп барған аҙнала ла был көйәҙ "ханым" шулай көйһөҙләнеп алды, хатта ҡалала ғәҙәттән тыш хәл иғлан ителеп, ҙур йөк машиналарына ҡала эсендә хәрәкәт итеү тыйылды, Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хеҙмәттәре артыҡ ихтыяж булмағанда юлға сығыуҙан тыйылып торорға саҡырҙы.**

Был, бер яҡтан, юлда транспорт әҙерәк булып, "тығындар"ға юл ҡуймаһа, икенсе яҡтан, транспорт әҙ булғанда коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәре юлдарҙы тиҙерәк һәм тотҡарлыҡһыҙ таҙартыу мөмкинлегенә эйә була. Хәйер, юл таҙартыусы транспорт каруанының нисек йөрөгәнен күргәнегеҙ ҙә барҙыр: бер юлы 7-8 махсус машина бер йүнәлештә бер-бер артлы ҡарҙы этеп, шул уҡ ваҡытта боҙлауыҡҡа ҡаршы реагент һибеп бара. Торлаҡ хужалығы хеҙмәттәре лә көсәйтелгән режимда эшләне. Көндәлек эштәрҙән тыш, ихаталарҙа алдан раҫланған графикка ярашлы комплекслы таҙартыу ҙа алып барылды. Бында иһә ҡарҙың күплеге генә түгел, граждандарҙың битарафлығы ла хәлде ҡатмарлаштыра: хужаһыҙ транспорт эште тотҡарлап ҡына ҡалмай, сифатты ла төшөрә, был машиналарҙы рөхсәтһеҙ алып китеп булмағанлыҡтан, улар таҙартылған территорияла ҡар йыйып ултыра бирә. Һөҙөмтәлә, магистраль урамдар матур итеп таҙартылһа ла, тротуарҙарҙа, ихата араларында аяҡ аҫты буҡкаға әйләнгән урындар ҙа етерлек, шул уҡ ваҡытта ҡыйыҡтан ҡар ишелеү ихтималлығы ла арта, боҙлауыҡтар барлыҡҡа килә.

Ысынында, был көндәрҙә Өфөнөң торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәре көсәйтелгән режимда эшләне. Көн дә тиерлек ҡаланы таҙартыуға 300-ҙән ашыу берәмек техника сыҡты. Уларға 800-ләп урам һепереүсе, торлаҡ предприятиелар хеҙмәткәрҙәре ҡушылды. Әммә тиҙ арала ғына барлыҡ урындарҙы ла таҙартып бөтөү мөмкин түгел. Граждандарҙың ялыуҙары буйынса тикшереүгә сыҡҡан етәкселәр ҙә быны инҡар итмәй. Хатта ғәҙәттән тыш хәлдәрҙе бөтөрөү һәм янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса комиссия ултырышында Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин граждандарҙан мөрәжәғәттәр күп булыуы, ә ҡала хеҙмәттәре диспетчерҙары, халыҡтың мөрәжәғәттәрен ҡабул итеү урынына, уларға күҙ йомоуын белдереүе тураһында тәнҡит һүҙҙәрен дә еткерҙе. Ошо ултырышта бөтә көстө ҡала территорияһын таҙартыуға ташларға тигән бурыс ҡуйған мэр хатта ҡала хакимиәтендәге сираттағы оперативканы күсереп, хеҙмәткәрҙәрен ҡар таҙартырға алып сыҡты һәм коммерция ойошмалары, уҡыу йорттары, төҙөлөш объекттары етәкселәре менән һөйләшеүҙәр алып барырға һәм уларға үҙҙәренә ҡараған территорияны тейешле кимәлдә тотоу бурысын йөкмәтергә ҡушты.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡабаҡ теше

❖ Ашҡаҙан ауыртҡанда көнөнә бер нисә мәртәбә берәр балғалаҡ ҡабаҡ тешен әрсеп ваҡлап ашағыҙ. Шулай уҡ ҡабығы әрселгән, ваҡланған 200 г ҡабаҡ тешенә 0,5 л ҡайнап сыҡҡан һыу ҡушып, төнгөлөккә ҡалдырырға һәм иртәнсәк һөҙөп, ашауҙан 20 минут алда көнөнә 4 мәртәбә яртышар стакан эсергә.

### Эренле шешектән

❖ Ҡайын еләген юл япрағына теҙеп шешек өҫтөнә ябаһың һәм бәйләп ҡуяһың. 1-2 көнгә етәрәк шешек һытыла, эрен сығып бөтә. Шулай уҡ оҙаҡ сирләп ятыуҙан тәндең тишелгән, сейләнгән еренә лә шул килешә. Йәрәхәт йүнәлгәс, урынына май һөртөргә.

### Топинамбур ашағыҙ

❖ Топинамбурҙа бер ниндәй зыянлы матдә юҡ. Уның бүлбеләрендә B1 һәм C витамины картуфҡа ҡарағанда ике, ә тимер тоҙҙары өс мәртәбәгә күберәк. Топинамбур ашҡаҙан сирен дә дауалай, ҡандағы шәкәрҙе лә рәтләй. Шәкәр сире менән яфаланыусыларға көнөнә 2-3 мәртәбә ашауҙан 10 минут алда 2-3 сей бүлбене ашарға кәрәк. Бүлбеләрен киптереп быяла һауытта һаҡлап, сәйгә ҡушып эсеү ҙә шәкәр менән сирләүсегә шифалы.

### Тамаҡ шешһә (ангина)

❖ Дауаланыу өсөн ваҡ картуф, шытҡан картуф, хатта картуф ҡабығы ла ярай. Картуфтарҙы яҡшылап йыуып, аҙ ғына һыу ҡойоп бешерергә кәрәк. Пар һыуҙан түгел, ә картуфтан сығырға тейеш. Картуфтан сыҡҡан парҙы 10-15 минут буйы танау һәм ауыҙ менән һуларға кәрәк. 2 валидол өҫтәргә лә мөмкин. сир көслө булһа, был дауаланыуҙы иртән һәм кис эшләргә.

❖ Ылыҫлы төнәтмә лә ярҙам итә. 3-5 ҡалаҡ ҡарағай ылыҫына 0,5-1 литр яңы ҡайнап сыҡҡан һыу ҡойорға, термоста төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк һөҙөргә, көн дауамында эсергә. Был дауа 1-6 ай эшләнергә тейеш. 1 айҙан һуң 2 аҙна ял итергә кәрәк. Төнәтмәне яҡты урында тоторға, иртәнгегә ҡалдырырға ярамай. Төнәтмә көн һайын эшләнә.

❖ 1 стакан һөткә 5 ҡәнәфер (гвоздика) һалып ҡайнатып, 1 балғалаҡ бал ҡушып, әҙ-әҙләп эсергә кәрәк.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Минең өсөн эҙләнеүҙәремдең иң әһәмиәтлеһе - үҙемдең башҡорт булыуымды асыҡлауым. Атай-әсәйем дә, олатай-өләсәйҙәрем дә, башҡа туғандарым да үҙҙәрен әлегә тиклем татар милләтенә ҡарайбыҙ, тип һананы.*

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Көньяҡ Алтай халыҡтарының береһе - туваларҙың биҙәү-ғәмәли сәнғәтен өйрәнеп, С.И. Вайнштейн кәкерсәктәрҙән торған кәкре һыҙыҡлы орнамент малсылыҡ менән шөғөлләнгән көнбайыш тува кешеләренең декорына хас тигән һығымта яһай, болан үрсетеүселәр уны белмәгән. С.В. Ивановтың классификацияһын үҫтереүҙе дауам итеп С.И. Вайнштенй көнбайыш тува халҡының орнаментында иртә күскенселек һәм һуңғы күскенселек ҡатламдарын бүлә. Иртә күскенселек осорона ҡараған ҡатламды ҡайыуҙа, күн, кейеҙ, башҡа йомшаҡ һәм ҡаты материалдарҙан торған әйберҙәрҙәге биҙәктәрҙә осраған кәкерсәктәр, парлы ишелмәләр, ике осло ырғаҡтар, пальметта (пальма ағасының елпеүескә оҡшаш япрағы рәүешендәге орнамент), оя биҙәктәр, тулҡынға оҡшаш һәм башҡа шундай элементтар тәшкил иткән. Мотивтарҙың күпселек өлөшө Саян-Алтайҙың башҡа халыҡтарына, яҡуттарға һәм Урта Азия халҡына ла таныш булыуын инҡар итмәй. Ғалимдар шулай уҡ орнаменттың барлыҡҡа килеү осоро һәм сығанағы мәсьәләһендә лә килешә. Беҙҙең эраға тиклем I мең йыл элек һәм беҙҙең эраның I меңйыллығы башындағы археологик ҡомартҡылар (Пазырык, Башадар, Туэкта ҡурғандары) материалдарына таянып С.И. Вайнштейн һүрәтләнгән орнамент мотивтары бронза быуаты осоронда Себерҙең көньяҡ дала ҡәбиләләренең һынлы сәнғәтендә өҫтөнлөк иткән, Евразия территорияһында скиф һәм һун-сармат осоронда киң таралып китеүе ихтимал тип иҫәпләй. Көсмә тормошҡа яраҡлашҡан ғәҙәти орнамент менән биҙәлгән әйберҙәр традицион малсылыҡ йәшәү рәүеше һаҡланған осорға тиклем юғалмай.



*Сергетыштарҙағы нағыш үрнәктәре (БР, Белорет районы). Т.К. Сурина фотоһы. 1976*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ҠАН ХӘТЕРЕ*

**Үҙ тамырҙарын барлағандар күбәйә арабыҙҙа. Шәжәрәләрҙе өйрәнеү ҙә киң таралды. Архивта көндәр дауамында мәғлүмәт эҙләүселәр һаны ла бермә-бер артты, ти архив хеҙмәткәрҙәре. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ ошондай эҙәрмәндәрҙең береһе - Өфө егете Артур АЛАҠАЕВ.**

# ШӘЖӘРӘМДЕ ӨЙРӘНЕҮ...

## күңелемдәге рухтан килә



*Алаҡаевтар яғынан ҡарт олатай һәм ҡарт өләсәй. Яҡынса 1898 йылда тыуғандар.*

**➔ Артур, был ғәмәлгә, йәғни шәжәрәңде өйрәнеүгә тотоноуға кем йәки нимә этәрҙе?**

- Бала саҡтан ҡыҙыҡһыныусан, бөтә нәмәне белергә тырышыусылар рәтендә булдым. Әле лә ошо ғәҙәтем, тип әйтәйемме, үҙем менән. Ошо ҡыҙыҡһыныуҙарым араһында шәжәрәмде өйрәнеүгә ынтылыш айырым урын алып тора. Был эшкә тотоноу өсөн ниндәйҙер аныҡ сәбәп булманы, барыһы ла күңелемдән килә, йөрәк ҡушыуы буйынса башҡарам был эште. Тәүҙә фамилиямдың килеп сығышын белеү теләге тыуҙы. Уны өйрәнеү барышында төплө яуап талап итеүсе өҫтәмә һорауҙар тыуҙы, шәжәрәмде өйрәнеүгә тағы ла нығыраҡ этәреүсе ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәргә юлыға барҙым. Асылмаған сер һәр ваҡыт кеше күңелен ҡуҙғытып тора, миндә лә элекке быуыным тураһында барыһын да белеү теләге көсәйә барҙы һәм был эшмәкәрлеккә ентекле тотондом.

Бала саҡта уҡ үҙемдең ата-бабаларым тураһында һөйләгәндәрен иғтибар менән тыңлар инем. Бигерәк тә олатайым был хаҡта күп мәғлүмәт бирҙе. Ләкин бөгөн килеп, үҙемдең эҙләнеүҙәрем барышында тапҡан мәғлүмәттәрҙән сығып, уның һөйләгән ҡайһы бер факттары ысынбарлыҡҡа тап килмәй икәнен аңланым. Олатайымдың йәш сағында, хатта беҙҙең бала саҡта ла әле ғаиләң тарихын белергә тырышыу, шәжәрәне өйрәнеү тигән күренештәр артыҡ хупланманы. Шуға күрә, ни өсөн олатайымдың һөйләгәндәрендә яңылышлыҡ булыуын яҡшы аңлайым. Бөгөн килеп, дөрөҫлөктө табыу, үҙемдең тамырҙарымды барлау бурысы беҙҙә, йәш быуында. Нәҡ беҙ үҙебеҙҙең балаларға, киләсәк быуынға ысынбарлыҡҡа тап килгән тарихи мәғлүмәттәр ҡалдырырға тейешбеҙ.

Шәжәрәмде өйрәнеү эше тиҙ генә тамамланыр, тип уйламайым, сөнки эҙләй торған мәғлүмәт бик күп. Шәжәрәмде быуындар төпкөлөнә генә төшөп түгел, ә бөтә яҡҡа таралған тармаҡтарын да өйрәнергә тип уйлайым. Әлеге көндә мин 1700 йылдарға тиклемге шәжәремде өйрәнеп, 8-10 быуын ата-бабамдың исемшәрифен асыҡланым, уларға ҡағылышлы тарихты белдем.

**➔ Эҙләнеүҙәр тағы ниндәй һөҙөмтәләргә алып килде?**

- Минең өсөн эҙләнеүҙәремдең иң ҡыҙыҡлыһы һәм әһәмиәтлеһе - үҙемдең башҡорт булыуымды асыҡлауым. Атай-әсәйем дә, олатай-өләсәйҙәрем дә, башҡа туғандарым да үҙҙәрен әлегә тиклем татар милләтенә ҡарайбыҙ, тип һананы. Минең асыштарым уларҙың ҡайһы берәүҙәрен аптыратты. Икенселәре ышанманы, ә кемгәлер был оҡшаманы. Ләкин үҙ булмышыңдан ҡасып йәки йәшенеп булмай, уны нисек бар, шулай ҡабул итергә кәрәк. Әлегә тиклем был мәсьәләлә асыҡлыҡтың булмауы йәл, әлбиттә, сөнки һәр кем үҙенең тамырҙарын белергә хоҡуҡлы.

XX быуат башында туғандарымдың ҡайһылары башҡорт тип яҙылған, ә икенселәре татар тип теркәлгән. Буталышлы заманалар булған, хатта бер туғандар ике милләт вәкиленә әйләнеп киткәндәр. Мәҫәлән, минең олатайым "татар" тип яҙылған, ә уның бер туған ағалары "башҡорт" тип билдәләнгән. Бер ғаилә эсендә ике милләт булыуы мөмкин түгел, шуға күрә минең өйрәнеүҙәрем бик күп һорауҙарға яуап табырға булышлыҡ итте. Ниһайәт, беҙ үҙебеҙҙең ниндәй тамырҙан яралыуыбыҙҙы, ниндәй милләткә ҡарауыбыҙҙы тарихи документтар нигеҙендә асыҡланыҡ. Тәүҙ ҡарашҡа бәләкәй генә эш күренһә лә, уның әһәмиәте бөгөнгө быуын өсөн генә түгел, ә иң мөһиме балалар яҙмышына барып бәйләнә.

Өләсәйем яғынан да шәжәрәмде өйрәнеп, ул яҡтан да үҙебеҙҙең башҡорттар булыуыбыҙҙы асыҡланым. Уның яҡлап туғандарым был мәғлүмәтте бик тыныс ҡабул итте. Улар, бәлки, электән күңелдәрендә бының шулай икәнен аңлап йәшәгәндәрҙер йәки асыҡ белгәндәрҙер.

**➔ Үҙеңдең башҡорт икәнеңде асыҡлау һиндә ниндәй тойғолар уятты?**

- Иң беренсе, минең ҡыҙыҡһыныусанлығым тағы ла тәрәнәйҙе. Мин башҡорт халҡының тарихын өйрәнә башланым. Хәҙер миңә башҡорт милләтенә ҡағылышлы булған бөтә мәғлүмәт тә ҡыҙыҡлы. Эҙләнеүҙәр барышында, мәҫәлән, минең атай-олатайҙарым Бүздәк районына нигеҙ һалыусылар рәтендә булыуын асыҡланым. Кәләшем ошо район ҡыҙы. Быға тиклем унда йыш барып йөрөһәм дә, хәҙер бөтөнләй икенсе тойғолар менән Бүздәк яҡтарына юлға сығам. Ошо ерҙәрҙә әллә күпме быуаттар элек минең олатайҙарым йәшәгән, мал көткән, йәйләүгә сыҡҡан, һунар иткән. Бөтә был күренештәрҙе күҙ алдына килтереү күңелдә аңлата алмаҫлыҡ тойғолар уята. Тамырымды белеү миңә рухи көс өҫтәй. Үҙеңдең балаларыңа ниндәй ырыу-заттан булыуыңды төплө итеп аңлатыу һәм уларҙың күңеленә һеңдереп ҡалыу һәр ата-әсәнең бурысы. Тормош көткән саҡта аяҡта төплө баҫып тороу һәм был донъяла үҙеңдең булмышыңды табыу өсөн шәжәрә ҙур ролгә эйә. Әгәр ҙә кеше үҙ ғаиләһенең тарихы менән ҡыҙыҡһынмаһа һәм уны төптән белмәһә, тотош илдең, милләттең үткәненә һәм киләсәгенә ул битараф булалыр, тип уйлайым.

**➔ Һин маҡсатлы рәүештә шәжәрәңде өйрәнә башлап, тамырҙарың ниндәй милләткә барып тоташыуын асыҡлағанға тиклем ғаиләгеҙҙә башҡортлоҡҡа күрһәтеп тороусы нимәләр бар инеме?**

- Беҙҙең ғаиләлә, мин үҙемде хәтерләгәндән алып, һәр саҡ урыҫ телендә аралаштылар. Балаларҙың теле урыҫса асылды, ғүмер буйы барыһы ла ошо телдә һөйләште. Беҙ, мәҫәлән, йәш быуын, башҡорт телен бөтөнләй аңламайбыҙ, фекерләүебеҙ ҙә урыҫса. Атайым башҡортса аңлауын аңлай, ләкин хәҙер шулай уҡ һөйләшмәй. Уның хәтерләүенсә, бала саҡта улар татарса һөйләшкән, ләкин уға һәр саҡ "Һинең башҡортса акцентың бар", тип әйтер булғандар. Тимәк, төпкө аң аша атайымда башҡортлоҡ ныҡ сағылыш тапҡан булған, ләкин яйлап ул осҡон да һүнгән.

Башҡа туғандарым араһында үҙара татарса һөйләшкәндәр күп. Бәлки, улар төньяҡ-көнбайыш башҡорт диалектында аралашаларҙыр. Ҡыҙғанысҡа күрә, үҙем ул телдәрҙе белмәгәс, аныҡ ҡына әйтә алмайым. Башҡорт теленә ҡағылышлы бөтә һорауҙар менән дә миңә кәләшем ярҙам итә, ул башҡорт телен бик яҡшы белә. Йәйлап үҙем дә өйрәнермен, тип ышанам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шәжәрә - ябай ғына һүҙ булһа ла, үҙенең эсенә әллә күпме мәғлүмәт һыйҙыра, сөнки ҡағыҙға теркәлгән һәр исем аҫтында ҙур тарих ята. Үҙ шәжәрәһен өйрәнеүсе кеше айырым бер ғаиләнең генә түгел, ә тотош ауыл һәм хатта ил тураһында үҙе өсөн яңы факттар аса. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ ошо оло юлдың башында ғына тора, уға үҙ шәжәрәһен төҙөүҙә уңыш һәм илһам теләргә генә ҡала.**

**Гөлназ МАНАПОВА әңгәмәләште.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

22

# Шифа

8-14 февраль (шаҡай) 2020 йыл

№6 (892)

КӨНАУАЗ

**Һуңғы ваҡытта тотош донъя хәүеф солғанышында ҡалды, хатта быға тиклем ҡайҙа һуғыш, атыш, үлтереш, ҡайҙа аслыҡ, ялanғаслыҡ, хәйерселек, ҡайҙа, нимә, ҡасан булғанына битараф ҡалмаған халыҡты бөгөн хатта илдәге, дәүләттәге үҙгәрештәр ҙә әллә ни борсомай, сөнки иғтибар үҙәгенә Ҡытай тарафынан янаған коронавирус тип аталған афәт сыҡты. Сығып ҡына ҡалманы, барыһын да аяҡҡа баҫтырҙы. 6 февраль мәғлүмәттәре буйынса, был сирҙән 549 кеше вафат булған (сир сығанағы булған Уханда - 414 кеше). Сирләүселәрҙең һаны ла көн һайын арта бара. Уларҙың күпселеге Хубэй провинцияһында, шулай уҡ Пекинда, Гуандун, Шанхай провинцияларында, Гонконгта, Тайвандә.**

# ҺӘР СИРҘЕҢ...

## дауаһын да биргән Хоҙай



Әлеге ваҡытта республика инфекцион дауаханаһында шикле тойолған сирлеләрҙе килтерәләр, әммә, бәхеткә күрә, анализ тапшырғандан һуң сир раҫланмай. Ләкин был тынысланырға ярай тигәнде аңлатмай, киреһенсә, эпидемия хәҙер Ҡытай сиктәренән сығып, бөтә донъяға тарала башлағанлыҡтан (Таиланд, Япония, Көньяҡ Корея, АҠШ, Сингапур, Вьетнам, Непал, Австралия. Ошо көндәрҙә Филиппинда бер кешенең вафат булыуы теркәлә), уға нисек тә булһа ҡаршы торорға кәрәк, уның таралыуына юл ҡуйырға ярамай. Был йәһәттән Өфө аэропорты хеҙмәткәрҙәре имен булмаған сит илдән килеүсе пассажирҙарҙы ҡусмә тепловизион ҡорамал ярҙамында тикшерә. Быға тиклем Ҡытай медиктары сирҙең кешенән-кешегә йоҡмауына инандырырға тырышһа ла, ул һауа-тамсы юлы менән тапшырылыусы вирус инфекцияһы иҫәпләнә.

Сир тәү ҡарашҡа ябай киҫкен респиратор вирус инфекцияһы (ОРВИ) кеүек билдәләргә эйә: юғары температура, тамаҡ ауырта, танау тона, тән һыҙлай, йүтәл барлыҡҡа килә, конъюнктивит көсәйтелә, ҡайһы бер осраҡтарҙа ҡосторорға, эс китергә мөмкин. Шуға күрә белгестәр температура күтәрелгәндә, Ҡытайҙа булып ҡайтҡан кешеләр менән аралашҡанда һаҡ булырға кәңәш итә. Әлегә вирустың инкубацион осоро күпмегә һуҙылғаны асыҡ ҡына билдәле булмаһа ла, уны ОРВИ кеүек ике аҙна тип ҡарайҙар. Шуға ла Ҡытайҙан ҡайтыусыларға ла тынысланырға ярамай, бәлки, улар тикшереү үткәндә тап инкубация осоро барған булыуы һәм сир һуңынан көсәйеүе ихтимал. Һәр хәлдә, нindәйҙер шик тыуһа, табиптарға мөрәжәғәт итергә кәрәк, сөнки сирҙе бары тик лаборатор тикшереүҙәр генә асыҡлай.

Сирҙең киҫкенләшеүе вирусы үпкә шешенә килтереүе ихтимал. Сирлененең бер тәүлек эсендә тын алыуы ауырлашыуы мөмкин һәм уға үпкәләрҙе механик елләтеү талап ителә. Ауырыуға ни тиклем тиҙерәк ярҙам күрһәтелә - шул тиклем яҡшы.

Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, Роспотребнадзор етди инфекцияны асыҡлау диагностикаһын эшләгән, ярты йыл эсендә вакцина ла эшләү күҙаллана. Ә уға тиклем вирустан нисек һаҡланырға? Иң мөһиме - ҡулдарҙы һәм өҫтәндә таҙа тоторға кәрәк, тип кәңәш итә белгестәр. Ҡулдарҙы йыуғандан һуң уны дезифекциялау саралары менән эшкәртегеҙ. Быcраҡ ҡулдарығыҙ менән ауыҙ, танау йәки күҙегеҙгә теймәгеҙ (ғәҙәттә, беҙ был ағзаларға сәғәтенә 15 тапҡыр ҡағылып алабыҙ). Үҙегеҙ менән һәр саҡ дезинфекциялау сараһы йөрөтөгөҙ һәм теләһә ниндәй шарттарҙа ла ҡулығыҙҙы таҙартып алығыҙ. Күптәр вирус эпидемияһынан медицина битлеге кейеп ҡотолоп ҡалырға тырыша. Әммә уларҙы ҡулланғанда ла мөһим ҡағиҙәләрҙе үтәргә кәрәк. Битлек менән бит араһында бушлыҡ булмаһын. Уны кейгәс, ҡулығыҙ менән ҡағылмағыҙ, ә инде сисер алдынан ҡулығыҙҙы йыуығыҙ. Бер битлекте ҡабат-ҡабат ҡулланмағыҙ.

Дауа һөҙөмтә бирәме? Быға тиклем Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы коронавирусты рибавирин препараты менән дауаларға тәҡдим иткәйне. Әммә Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы быны инҡар итә. Был хаҡта Рәсәй Фәндәр академияһы академигы Александр Чучалин белдерә. Коронавирус тәү тапҡыр 2002 йылда барлыҡҡа килә. Рәсәйҙең медицина әҙәбиәтенә - "ғәҙәти булмаған пневмония (атипичная пневмония)" булараҡ инә, ә уның халыҡ-ара дөрөҫ аталышы - "ауыр киҫкен респиратор синдромы". Тап шул саҡта рибавиринға тест үткәрелә лә инде. 2012 йылда коронавирус менән бәйле икенсе синдром барлыҡҡа килә. Уның биологик сығанағы булып дөйә тора. Ул ваҡытта ла рибавирин менән дауалау һөҙөмтә бирмәй. Чучалин әйтеүенсә, бөгөн коронавирусты һөҙөмтәле дауалаусы препарат юҡ.

Эпидемиологтар фекеренсә, эпидемиологияла инфекцион сирҙең халыҡ араһында таралаcаҡмы һәм ул ни тиклем йоғошло булыуын билдәләргә ярҙам иткән репродуктив һан - Ro бар. Киҙеүҙә был күрһәткес 1,2 самаһы, испан киҙеүендә - 2,8, ҡыҙылсала - 12-18. Ухань вирусы, йәғни коронавируста был күрһәткес - 1,4, йәғни ҡыҙылсанан 9 тапҡырға кәмерәк.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Күпселеккә барлыҡ тереклектең энергиянан - билдәле йышлыҡта тирбәлгән өлөшсәләрҙән тороуы ла мәғлүм түгел. Махсус ҡеүәтле микроскопта тикшергәндә, вирустарҙың репродуктив һанын билдәләгән кеүек, уларҙың тирбәлешен дә асыҡларға мөмкин. Йәғни, әгәр кешенең тирбәлеше вирустың тирбәлешенән түбәнерәк икән, уға сир йоға, киреһенсә булғанда, сир яҡын да килмәй, сөнки был мөхиттә уға йәшәү мөмкинлеге юҡ, ул үлә. Тимәк, организмдың тирбәлешен күтәреп, һау-сәләмәт ҡалырға була. Быны өсөн бары тик изге уйҙа булырға, ҡыуанырға, ыңғай көйләнештә йәшәргә, бөтөн нәмәне ниндәйҙер шарт буйынса түгел, ә бер талапһыҙ яратырға, уңышҡа көйләнергә кәрәк. Ә инде кире хис-тойғолар, асыу, ярһыу, үкенеү, күңел төшөнкөлөгө, бер нәмәгә риза булмау, һәр саҡ кире һөҙөмтә көтөү һ.б. организмдың тирбәлешен кәметә. Аллаһы Тәғәлә Кешелеккә һынау итеп сир бирә икән, уның дауаһын да бирә икәне һәр кемгә мәғлүм: һәр сирҙең дауаһы үҙебеҙҙә.**

Земфира ЙӘНТҮРИНА.

МЕДИЦИНА ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# КЕМГӘ - БӨЙӨР?

**Былтыр Башҡортостанда трансплантация үҫеше тарихында тәүге тапҡыр ағзаларҙы күсереп ултыртыу буйынса 50-нән ашыу операция яһалған.**

Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһында бөйөрҙө күсереп ултыртыу буйынса беренсе операция 1996 йылда эшләнгән. Ошо ваҡыт эсендә Башҡортостанда бөтәһе 468 бөйөр күсереп ултыртылған. "2019 йыл йөрәкте күсереп ултыртыу буйынса ла рекордлы булды, - тип билдәләнеләр республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында. - Быйыл өс-дүрт урынына ете операция яһалған". Әлеге ваҡытта Республика дауаханаһында һәм Республика балалар клиник дауаханаһында - бөйөрҙә, бауырҙы, ә Республика кардиология үҙәгендә йөрәкте күсереп ултыртыу операциялары яһала. "Бөгөн 155 пациент яңы бөйөр көтә. Башҡортостанда бөтәһе 1,2 меңдән ашыу кеше алмаштырыусы бөйөр терапияһында. Әле 66 кеше - бауырҙы, 22-һе йөрәкте күсереп ултыртыу операцияһына сиратта тора. Бынан тыш, ашҡаҙан аҫты бизен күсереп ултыртыуға ла сират бар. Хәҙер унда 21 пациент", - тип өҫтәнеләр министрлыҡта.

# АБОРТҠА БАРМА!

**Башҡортостанда аборттар кимәлен кәметеү һәм тыуымды арттырыу буйынса ведомство-ара программаның проекты әҙерләнгән. "Ғүмер бүләк ит" программаһы 2020-2024 йылдарға иҫәпләнгән.**

Атап әйткәндә, республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығы, Хеҙмәт министрлығы, Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы Башҡортостан бюджеты аҡсаһына ҡатын-ҡыҙҙар консультацияларында, ауыр тормош хәлендә ҡалған ҡатын-ҡыҙҙарға ярҙам үҙәктәрендә медицина-социаль ярҙам кабинеттарын асырға, социаль хеҙмәттәр ойошторорға, дини конфессиялар менән килешеүҙәр төҙөргә, call-үҙәктәр булдырырға, йөклөлөктө һаҡлау буйынса тапшырыуҙар һәм социаль роликтар циклын төшөрөргә ниәтләй. "Ҡатын-ҡыҙҙарҙың 75 проценттан ашыуы эске сәбәптәр арҡаһында аборт тураһында ҡарар ҡабул итергә мәжбүр була. Ҡайһы бер осраҡтарҙа ғына бала тыуыуға бәйле тормош хәленең киҫкенләшеүе мөмкин. Бындай осраҡтарҙа квалификациялы белгестең ярҙамы кәрәк", - тиелә "Ғүмер бүләк ит" программаһы проектында. Йыл һайын программаны ғәмәлгә ашырыуға республика бюджетынан 5-әр миллион һум аҡса бүлеү планлаштырыла. Аҡса шул иҫәптән ҡатын-ҡыҙҙы абортҡан дүндергән табип-гинекологтарға премия түләүгә тотонола. Һәр осраҡҡа - 5-әр мең һум.

# ЯҢЫ ОНКОҮҘӘКТӘР...

**Быйыл республикала дүрт онкология үҙәге асыла. Был турала Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин хәбәр итте.**

"Өфөнөң 13-сө дауаханаһында, Күмертауҙа, Нефтекамала һәм Октябрьскийҙа үҙәктәр эшләй, - тине Һаулыҡ һаҡлау министрлығы етәксеһе. - Шулай уҡ Стәрлетамаҡта беренсе квартал аҙағында 1-се ҡала дауаханаһында химия терапияһы бүлеген асыу күҙаллана. Онкология диспансерында палаталы поликлиника корпусы файҙаланыуға тапшырыла". Һаулыҡ һаҡлау министрлығы башлығы һүҙҙәренсә, хәҙер яман шеш ауырыуҙарын диагностикалау өсөн аппаратураның иҫкереү проблемаһы бар. Әлеге мәлдә 60-70 проценты - иҫке. Был база яйлап яңыртыла. Республика компетентлы кадрҙарға ла мохтаж. Максим Забелин һүҙҙәренсә, бөгөн 120 онколог етешмәй. 2020 йылда 30 белгестең килеүе көтөлә. Республика клиник онкология диспансерының баш табибы Адель Измайлов әйтеүенсә, Башҡортостанда яман шештәрҙе асыҡлау осраҡтары арта. "Бөгөн республикала йәшәүселәр йышыраҡ йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән яфалана. Онкологияны асыҡлауҙың алға барышын иҫәпкә алып, тиҙҙән тап ошо ауырыуҙар беренсе урынға сығыр, - тине республика онкология диспансерының баш табибы. - 2019 йыл йомғаҡтары буйынса, тикшереү үткән пациенттарҙың 56,5 процентында беренсе һәм икенсе стадияларҙа яман шеш табылған". Белгестәр онкологик сирҙәргә килтергән сәбәптәр араһында экологияның бик насар хәлдә булыуын, кешенең туҡланыуын, алама ғәҙәттәрҙе (тәмәке тартыу һәм алкоголь ҡулланыу), генетик бирешеүсәнлекте билдәләй.

**✓ Улар һөҙөмтәле эшләргә һәм барған районға файҙа килтерергә тейеш. Бының өсөн пациенттарҙың хәбәрҙар булыуы ла мөһим, сөнки район - ул үҙәк биләмә генә түгел, ә яҡын-тирәләге, хатта төпкөлдәге ауылдар.**



СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ДАУАХАНАҒА

## дауахана һиңә үҙе килә

**Былтыр Башҡортостан Республикаһының Һаулыҡ һаҡлау министрлығы "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы уҙғарҙы. Уның барышында 105 меңдән ашыу кеше беренсел медицина ярҙамы алды, 10 мең социаль сир: шәкәр сире (868 осраҡ), туберкулез (101), яман шеш ихтималлығы (606) һәм уның 51 раҫланған осрағы, 8 меңдән күберәк кешенең ҡан баҫымы юғары булыуы теркәлә. Шулай уҡ республика районлары һәм ҡалаларына тар медицина белгестәренән тупланған күсмә бригадалар ҙа сыҡты. Улар ихтыяж булған барлыҡ категория граждандарҙы ла ҡабул итте. Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ Республика клиник балалар дауаханаһының баш табип урынбаҫары, медицина фәндәре кандидаты, БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының балаларға амбулатор-поликлиника ярҙамы күрһәтеү буйынса штаттан тыш баш белгесе Артур МОСТАФИН менән ошо хаҡта һөйләшәбеҙ.**

**▸ Һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин белдереүенсә, күсмә бригадалар урындарҙа халыҡҡа сифатлы медицина ярҙамы күрһәтеү маҡсатынан булдырыла. Үҙегеҙ ошо бригада ағзаһы булараҡ, эштең нисек ойоштороло-уы тураһында ентекләберәк аңлатып китмәҫһегеҙме?**

- Бер йүнәлеш буйынса беҙ район дауаханаларына методик-ойоштороу эштәре буйынса ярҙам күрһәтәбеҙ. Икенсе йүнәлеш буйынса төп табиплыҡ эшен атҡарабыҙ, йәғни халыҡтың сәләмәтлеген тикшерәбеҙ. Был бригадалар райондарҙың ихтыяжынан сығып булдырыла. Йәғни, республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығы һәр райондың ихтыяжын белә, махсуслашҡан ниндәй табиптарға ҡытлыҡ булыуын тикшерә, анализлай һәм белгестәр командаһын туплап, шул урынға ебәрә. Был күсмә бригадаға бер генә түгел, төрлө дауахана табиптары инергә мөмкин. Ололарҙы - башҡа бригадалар тикшерһә, беҙҙең өлкәгә 18 йәшкә тиклемге балалар инә.

Бында шуныһы ла мөһим: барасаҡ райондың медицина учреждениеһы табиптарҙы ҡабул итергә әҙер булырға тейеш, йәғни табиптарҙы үҙҙәренең эш урынындағы ҡабул итеүҙәрҙән, дауалау процесынан айырып алып барабыҙ һәм улар командировкаларҙа ваҡыттарын бушҡа үткәрмәҫкә, ә һөҙөмтәле эшләргә һәм барған районға файҙа килтерергә тейеш. Бының өсөн пациенттарҙың хәбәрҙар булыуы ла мөһим, сөнки район - ул үҙәк биләмә генә түгел, ә яҡын-тирәләге, хатта төпкөлдәге ауылдар. Халыҡты райондың медучреждениеһы алдан хәбәр итеп, үҙе йыя. Эшебеҙҙе шундай итеп ойошторабыҙ, бер табип көн дауамында 50 кешегә тиклем ҡабул итергә тейеш.

Бригада килеүгә райондарҙың медучреждениеларына диагностика үткәреү өсөн база әҙерләргә лә ҡушабыҙ. Әгәр, мәҫәлән, гастроэнтеролог пациентҡа ультратауышлы тикшереү үткәрергә тейеш икән, ул эргәлә булырға һәм шунда уҡ УЗИ үткәрелергә тейеш. Һөҙөмтәлә пациенттар тулыһынса тикшерелгәндән һуң диагноз һығымтаһы һәм артабан дауаланыу, күпме ваҡыттан һуң ҡабат тикшереү үтеү өсөн күрһәтмәләр ала. Уларҙың бер өлөшөн, әгәр сирҙәре амбулатор дауаланыу сиктәренән сыҡһа, Өфөгә, планлы госпитализацияға саҡырабыҙ. Дөйөм алгоритм шундай, ә беҙҙең табиптар, әлбиттә, балалар менән эшләй.

Был эшмәкәрлек бик ҡыҙыҡлы ла, кәрәкле лә, сөнки райондарҙы махсус белгестәр менән тәьмин итеп бөтөү әлегә мөмкин түгел. Был иҡтисади йәһәттән дөрөҫ тә түгел, ни тиһәң дә, бындай белгестәрҙең пациенттары бик аҙ булыуы ихтимал. Пациенттар шартлы рәүештә планға ингән һәм инмәгәндәргә бүленә, йәғни улар даими иҫәптә тора һәм даими консультация, дауаланыу алып тора. Шуға, күсмә тикшереү барышында планға инмәгән пациенттарҙы тикшерергә тырышабыҙ.

**▸ Район һәм ҡалалар медучреждениелары ниндәй белгестәргә ҡытлыҡ кисерә?**

- Һәр районды айырым ҡарамайынса дөйөмләштереп әйткәндә, нейрохирург, акушер-гинеколог, уролог, колопроктолог, гинеколог-репродуктолог, гастроэнтеролог, пульмонолог, оториноларинголог, шулай уҡ ололар һәм балалар кардиологтарына, неврологтарға, эндокринологтарға һәм офтальмологтарға, кардиоревматологҡа ихтыяж бар. Әммә йыл дауамында үткәрелгән 20-30 күсмә тикшереү был ихтыяжды тулыһынса ҡәнәғәтләндерә, тип әйтә алам. Бәлки, бер йылда ниндәйҙер районға бармай ҡалабыҙ икән, тимәк, унда ихтыяж ул тиклем ҙур түгел.

Бөгөн кадрҙар менән эш әүҙем алып барыла һәм былтыр күҙәтелгән хәл-торош быйыл күп райондарҙа яҡшы яҡҡа үҙгәреүе һиҙелә. Республика Башлығы ла, республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ла кадрҙар менән системалы эшләүҙе өҫтөнлөклө итеп ҡуйҙы һәм хатта тармаҡтан китергә уйлап йөрөгән табиптар эшендә ҡалды, табип булып эшләргә планлаштырмаған талиптар кире уйлай башланы, сөнки урында властар йәш ғаилә өсөн мөһим булған торлаҡ менән дә, башҡа өҫтөнлөктәр менән дә тәьмин итә. Бөгөн инде, кадрҙар менән эш - ваҡытлыса проблема, тип әйтергә була.

**▸ РФ Федераль Йыйылышына Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһағанда РФ Президенты Владимир Путин төбәк вуздарында бюджет урындарын 70, хатта 75 процентҡа еткереү тураһында белдерҙе. Шул уҡ ваҡытта, республика мәктәптәренең сығарылыш уҡыусылары төбәк медицина вузына инеү балдарының башҡа төбәктәрҙәге медицина университеттары менән сағыштырғанда күпкә юғары булыуын билдәләй. Был осраҡта Башҡортостанға юғары баллы сит өлкә абитуриенттары килеп, үҙебеҙҙекеләр ситкә китеп, шунда тороп ҡалыу, ә беҙҙә уҡып сыҡҡандар үҙҙәренә ҡайтып китеү ихтималлығын нисек хәл итергә?**

- Юғары уҡыу йортона инеү балдары һәр вуздың үҙенең компетенцияһында. Ул белем алырға теләүселәрҙең һанына ҡарап, үҙгәреп тә тороуы мөмкин. Әгәр абитуриенттар 10 мең икән, талап күтәрелә, әгәр 500 кеше йәки унан да кәмерәк икән - планка төшә. Бында, билдәле, белем кимәле беренсе урында торорға тейеш, ә медицина университетында уҡырға инеү теләге генә түгел. Сөнки барыбыҙ ҙа табиптарҙың юғары квалификациялы булыуын теләйбеҙ, ә балаларҙы уҡытырға теләгәндә талаптарҙың юғары булыуынан ҡәнәғәт түгелбеҙ. Шуға Берҙәм дәүләт имтиханы буйынса ҡабул итеү балдары кимәлен уҡыу йорто етәкселеге ата-әсәләрҙән, ситтән күҙәтеүселәрҙән яҡшыраҡ белә һәм дөрөҫ билдәләй, тиер инем.

Ә инде табиптар эшкә ситкә китмәһен, медицина университетын тамамлаған башҡа төбәктәрҙән килгән студенттар Башҡортостанда эшкә ҡалһын тиһәк, әле алып барылған социаль сәйәсәт ныҡ ярҙам итәсәк. Һәр баш табиптың социаль селтәрҙәрҙә үҙенең сәхифәһе бар һәм уларҙа халыҡҡа белдереүҙәр яһала, шул иҫәптән буласаҡ белгестәргә лә төрлө саралар тураһында мәғлүмәт бирелә. Элек күптәр ыңғай мәғлүмәтте ишетмәй ҡалһа, хәҙер барыһы ла белеп, күреп, уҡып тора.



Баш табиптар медицина йүнәлешендә белем биреү учреждениеларына килеп, үҙҙәренең буласаҡ хеҙмәткәрҙәренә күрһәтеләсәк социаль ярҙам тураһында һөйләй. Хәҙер инде медицина хеҙмәткәрҙәре араһында сәләмәт дәғүәселек һәм һайлау мөмкинлеге барлыҡҡа килде.

**▸ Мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, Башҡортостанда 17 йәшкә тиклемге балаларҙы беренсе профилактик тикшереүҙән һуң (яҡынса 626 мең кеше) уларҙың ни бары 24,4 процентының ғына тулыһынса сәләмәт булыуы, башҡаларында төрлө тайпылыштар, шул иҫәптән бик йыш нервылар системаһы, ашҡаҙан сирҙәре, һөйәк-мускулдар, күҙҙәр, эндокрин системаһы буйынса проблемалар булыуы асыҡланған... Был хаҡта ни тиерһегеҙ?**

- Был һорауға, моғайын, афоризм менән яуап бирергә мөмкиндер: сәләмәт кешеләр юҡ, тейешенсә тикшереү үтмәгәндәр бар. Ни тиклем күберәк кешене һәм ни тиклем ентеклерәк тикшерәбеҙ, шул тиклем теге йәки был ауырыуҙың киҫкенләшеүен профилактикалау өсөн ҙурыраҡ мөмкинлеккә эйә булабыҙ. Тикшерелгәндәрҙең 24,4 проценты ғына сәләмәт булыуын яҡшы йәки насар тип әйтеүе ҡыйын. Ниндәйҙер глобаль планда был насар, сөнки тотош халыҡтың һау-сәләмәт булыуын күрге килә. Икенсе яҡтан, был ҡалғандарҙың сәләмәтлеге үтә насар һәм бер нәмәне лә төҙәтеп булмай, тигәнде аңлатмай. Бында бик ныҡ эшләргә кәрәк. Хәҙер беҙ был пациенттар тураһында беләбеҙ, уларҙың үҫеш осоронда булған проблемаларын бөтөрөү өсөн тырышабыҙ. Асыҡланған сирҙәрҙең күбеһе башланғыс стадияла, һәм дауалау өсөн, ғәҙәттә, артыҡ проблема юҡ. Икенсенән, әгәр ниндәйҙер етди сирҙе асыҡлайбыҙ икән, ундай пациенттарҙы үҙебеҙҙә, республика учреждениеларында ҡабул итәбеҙ, ярҙам күрһәтәбеҙ.

Етди сирҙәр тиеү, моғайын, дөрөҫ тә түгелдер, уны ниндәйҙер терминға йәки сиргә бәйләп тә булмай. Мин был осраҡта сирҙе күҙ уңында тотмайым, ә пациентҡа ниндәйҙер оператив ярҙам кәрәклеген күҙҙә тотам. Мәҫәлән, дауахана шарттарында дауалау талап ителгән сир. Режимды үҙгәртеү, күҙәтеү аҫтында булыу, ярты йыл һайын тикшерелеп тороу түгел, ә тикшереү ваҡытында, әйтәйек, йөрәктә асыҡланған һәм операция талап ителгән аномалия. Ҡайһы берҙә баланың үҫешенә йоғонто яһаған аномалиялар була. Йәғни операция яһамаһаң, уның үҫеше тотҡарланасаҡ. Оператив медицина ярҙамы күрһәтелһә, барыһы ла яҡшы була. Бындай сирҙәр етәрлек.

Балаларҙың нервы ауырыуҙарына килгәндә, был бик бәхәсле мәсьәлә, быға төрлөсә ҡарарға була. Әммә балаларҙың психикаһы ныҡлы, тотороҡло булырға тейеш түгел. Улар әлегә хисле, һәр ҡайһыһының үҙ үҫеш кимәле, үҙ белем багажы. Ә тормошта барлыҡ ҡарарҙар тормошта тупланған тәжрибә һөҙөмтәһендә ҡабул ителә. Ололар үҙҙәренең хис-тойғоһо менән идара итә белһә, балаларҙа был сифат тулыһынса формалашып бөтмәгән. Шуға уларҙың илауы, ҡысҡырыуы, көйһөҙләнеүе шулай булырға тейеш кеүек ҡабул ителә. Уны ниндәйҙер сиргә бәйләп ҡарарға ярамай. Өс бала атаһы һәм балалар менән эшләүсе кеше булараҡ, быға еңел ҡарайым, проблема тип ҡабул итмәйем.

Диспансерлаштырыу, профилактик тикшереүҙәргә килгәндә, улар һәр береһенең үҙ нормативы булған айырым

***✓ Борон ата-бабаларыбыҙ яҙға аяҡ баҫҡас та ете көн рәттән балтырған, кесерткән, ҡуҙғалаҡ, йыуа һәм башҡа шуның кеүек үләндәрҙән йәшел аштар әҙерләп ашаған. Белмәй эшләмәгән бит улар быны.***



# ЙӨРӨРГӘ ЯРАТМАҺАҢ...

төркөмдәр. Бер өлөш сәләмәт тип табыла, бер өлөш күҙәтеү талап ителгән категория тип һанала, ҡалғандары инде дауалау талап ителеүселәр. Ошо нормативтар буйынса сәләмәттәр 24,4 процент, ә ҡалғандар - шартлы рәүештә сирле. Йәғни улар үҙҙәрен һау-сәләмәт тоя, медицина күҙлегенән ҡарағанда "төҙәтәһе" урындар бар.

**Шулай ҙа, ни өсөн балаларҙа ололар сирҙәре күҙәтелә: сирҙәр йәшәрә тиеүҙәре дөрөҫмө?**

- Быға юридик яҡтан ҡарап яуап бирергә лә була, тормоштан сығып та әйтергә мөмкин. Балаларҙа ололарға хас ауырыуҙар табыла, сөнки берҙәм диагноз ҡуйыу системаһы буйынса эшләйбеҙ. Сирҙәрҙең халыҡ-ара квалификацияһы бар, хәҙер уны 11-се тапҡыр ҡабаттан ҡарауҙы көтәбеҙ. Ошо квалификация буйынса барлыҡ диагноздар ҙа бер төрлө, йәғни уларҙың бер өлөшөн балаларға, бер өлөшөн ололарға ҡуйырға ла була, әммә факт һәм формулировка буйынса улар бер үк.

Ябай итеп, тормошсан итеп әйткәндә, хәҙер бит медицина тикшереүҙәре даими үтеп тора, медицинала билдәлелек, асыҡлыҡ барлыҡҡа килә. Бары тик элегерәк халыҡ үҙенең сәләмәтлегенә артыҡ иғтибар биреп бармай ине, хәҙер иһә ата-әсәләр балаларын ниндәйҙер сиргә бәйле түгел, ә былай тикшерергә килтерә. Элегерәк ниндәйҙер зарланыу булһа, педиатр үҙе ҡарап, үҙе дауалаһа, ниндәйҙер һығымта яһаһа, хәҙер диагнозды махсус профилле белгестәр ҡуя. Талаптар ҙа шундай - шикле диагноз күрһәң, шунда уҡ башҡа белгестәргә ебәрәһең.

**Республикала былтыр 2018 йыл менән сағыштырғанда инвалид балаларҙың һаны 4,3 процентҡа артыуы, йәғни 687 кешегә күбәйеүе уйландыра. Әйтеүҙәренсә, етлекмәй, бәләкәй ауырлыҡ менән тыуған балаларға өс йәшкә тиклем инвалидлыҡ бирелә. Был һандар шуның һөҙөмтәһеме, әллә икенсе сәбәптәре лә бармы?**

- Инвалид балаларҙың һаны артҡандыр тип уйламайым. Был, моғайын да, ҡануниәттәге үҙгәрештәргә, инвалидлыҡ критерийының үҙгәреүенә бәйлелер. Ҡануниәт нигеҙендә йүнәлтмәләр биреү тәртибе лә үҙгәрҙе. Элек инвалидлыҡ диагнозға ҡарап билдәләнһә, хәҙер иһә үҙен-үҙе ҡарай алыу-алмау мөмкинлегенән сығып бирелә.

Ваҡытынан алда йәки етлекмәй тыуған балалар буйынса... Был күренеш бит ғүмерлек түгел, барыһы ла тыуған ваҡытҡа үҫеш кимәленең ниндәй булыуына бәйле. Бәлки, уларҙың күреү һәм башҡа ағзалары тейешенсә үҫешеп етмәгәндер. Улар барыһы ла табиптарҙың күҙәтеүе аҫтында була - һәр пациент иҫәптә, улар график буйынса ҡарала, бынан тыш катамнез кабинеты бар һәм һәр район буйынса шундай кабинеттар ойошторабыҙ. Уларҙы офтальмолог, неонатолог, педиатр, невролог тикшереп тора, бынан тыш, кәрәкле белгестәр саҡырыла. Бала етлекмәй тыуһа ла, ул башҡаларҙан айырылмаған кеше булып үҫеп етә. Медицина яғынан беҙ уға үҫешергә ярҙам итәбеҙ һәм өс йәштәр тирәһендә улар тиҫтерҙәрен тулыһынса ҡыуып етмәһә лә, шул кимәлгә яҡынлаша, быға тиклем даими тикшереү аҫтында тотолған ҡайһы бер мәсьәләләр алына.

**Һуңғы ваҡытта йәмғиәттә балаларға прививка эшләтеү кәрәкме, кәрәкмәйме тигән бәхәстәр бара. Әлбиттә, медик булараҡ, һеҙ прививка эшләтеү яҡлы, әммә бының етди һәм ныҡлы нигеҙҙәре, дәлиле булырға тейештер бит?**

- Вакцинацияны мотлаҡ тип һанайым, сөнки беҙ ауырыу тураһында һүҙ алып барабыҙ, йәғни ул ниндәйҙер күләм менән бәйле. Әгәр вакцинация тотош популяцияға һауығыу, йәғни эпидемияға юл ҡуймау мөмкинлеген бирһә, прививканан һуң өҙләккәндәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Шуға күрә меңдәрсә кешеләрҙең һаулығы менән бер-ике кешенең өҙлөгөүен сағыштырыу урынлы түгел. Эпидемия булмаҫы - факт, ә киҫкенләшеү ихтмаллығы - факт түгел. Минең, мәҫәлән, өс балама ла прививкалар эшләнгән. Бер ваҡытта ла эшләтергәме, юҡмы, тигән һайлау тыуманы, бары тик сирҙән алда эшләтергәме, әллә сирләгәндән һуңмы, тигән һорау ғына булды. Вакцинация менән бик күп проблемалар хәл ителә. Кәрәкмәгән кеүек булһа ла, мәҫәлән, малайҙар эпидемик паротит (свинка) менән сирләне икән, был инде уға ғүмерлеккә түлһеҙлек менән янай. Әгәр прививкаһы булһа, сирләмәҫ тә, түлһеҙ ҙә ҡалмаҫ ине. Бындай миҫалдар меңдәрсә.

**Хәҙер йәштәр генә түгел, ололар ҙа сәләмәт тормош рәүешенә өҫтөнлөк бирә, һәр кем үҙенә тап килгән спорт менән шөғөлләнергә, саф һауала йөрөргә тырыша, республикала спортты үҫтереүгә ҙур иғтибар бүленә. Ниндәй сирҙәр балаларҙы физкультура дәресенән, спорт менән шөғөлләнеүҙән азат итә?**

- Бында бер нисә мәлде ҡарарға кәрәк: беренсенән, сир киҫкенләшкән мәлдә дәрестән азат итеү. Был ваҡытлыса - бер аҙнанан бер айға тиклем һуҙылған күренеш. Икенсенән, әгәр сир хроник, шулай уҡ ортопедия, травматология менән бәйле булғанда. Әлбиттә, баланы тулыһынса азат итеү күҙҙә тотолмай, ә һүҙ ниндәйҙер аныҡ көсөргәнештән азат итеү тураһында бара. Сөнки ҡайһы бер патология ваҡытында һикереү, киҫкен хәрәкәттәр эшләү ярамай, шул уҡ ваҡытта үҙебеҙ үк йөҙөргә тәҡдим итәбеҙ. Сәләмәт тормош алып барыуҙы бер кем дә тыймай, унан бары тик үҙеңә файҙа ғына алаһың, шуға спорттан бөтөнләй баш тартырға тырышырға ярамай.

**Мөхәммәт тауға килмәһә, тау Мөхәммәткә килә, тигәндәй, халыҡ медицина учреждениеларына йөрөргә яратмаһа, медицина учреждениелары халыҡҡа үҙе бара. Был күсмә бригадалар былтыр иғлан ителгән акция сиктәрендә генә эшләнеме, әллә ошо тәжрибәне артабан да дауам итеү күҙалланамы?**

- Табиптарҙың күсмә бригадалары быға тиклем дә эшләне, хәҙер ҙә эшләй һәм киләсәктә лә эшләйәсәк. Әммә уның формаһы үҙгәреүе мөмкин. Мәҫәлән, Сибайҙа проблема килеп тыуғайны, беҙ тупландыҡ та киттек. Шундай проблемалар башҡаса килеп тыумаҫ тип әйтеп булмай. Былтыр, мәҫәлән, Сәләмәтлек поезы формаһында күсмә тикшереүҙәр ойошторолдо. Маршруттар билдәләнде һәм күсмә лабораториялар, диагностика системалары менән йыһазландырылған махсус машиналарҙа бригадалар алдан билдәләнгән биләмәләргә барып, халыҡты тикшерҙе. Сәләмәтлек поездары былтыр ярты йылда тотош Башҡортостанды йөрөп сыҡты. Моғайын, быйыл да шундай уҡ план булыр. Һауа торошо мөмкинлек биреү менән ул тағы ла маршрутҡа сығыр, тип көтәбеҙ. Район үҙәк дауаханалары күсмә ФАП-тар менән тәьмин ителеүгә һәм улар бер-ике көнгә ауылдарға барып, халыҡҡа медицина ярҙамы күрһәтеү мөмкинлегенә эйә булыуға ҡарамаҫтан, был эш формаһы ла дауам итәсәк. Шулай уҡ күсмә тикшереүҙәрҙе төрлө варианттарҙа һәм системалыраҡ итеү ниәте лә бар. Әлеге мәлдә Республика клиник балалар дауаханаһы өсөн диагностика ҡорамалдары булған автобус һатып алына. Йәғни күсмә медицина ярҙамы күрһәтеү - ул ҡатып ҡалған система түгел, ә даими камиллаштырылып торған ысул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғалимдар билдәләүенсә, илдең иҡтисады туранан-тура халыҡтың сәләмәтлегенә бәйле. Иҡтисади үҫештең донъя тәжрибәһе лә быны раҫлай. Сәләмәт граждандар - теләһә ҡайһы илдең йәки дәүләттең төп байлығы, етештереү ресурсы булып ҡына тормай, ә уның социаль-иҡтисади хәлторошоноң индикаторы, лакмус ҡағыҙы ла ул. Бөгөн республика ғына түгел, ил етәкселегенең һаулыҡ һаҡлауҙы өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙең береһе итеп билдәләүе лә юҡҡа түгел. Бер килеп иҡтисад та тотороҡланыр, халыҡтың сәләмәтлеге лә яҡшыраҡ булыр, тип өмөтләнәйек.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

СӘЛӘМӘТЛЕК МӘКТӘБЕ



# АШҠАҘАН...

## ҡурҡып торалыр

**Бөгөнгө заманда кеше һаулығын ҡаҡшатыусы факторҙар бик күп: экология торошо эскән һыуыбыҙҙа ла, ашаған ризығыбыҙҙа ла, һулаған һауабыҙҙа ла сағыла. Иҫ киткес тиҙлек һәм мәғлүмәт осоронда стресс баҫымы ла үҙенекен эшләй. Ошондай шарттарҙа үҙебеҙҙе мөмкин тиклем кире йоғонтоларҙан араларға, сәләмәт йәшәү рәүеше булдырырға һәм һәр беребеҙгә үҙ һаулығын нығытыу буйынса ныҡышмалы шөғөлләнергә кәрәк.**

Был йәһәттән иң беренсе сиратта беҙ режим һаҡлауға һәм дөрөҫ туҡланыуға иғтибар итергә тейешбеҙ. Әйтәләр бит: нимә ашайһың, һин - шул, тип. Ауыҙыңа нимә ҡапҡаныңды белергә тейешһең: ашаған аҙыҡтың өстән ике өлөшө кислоталы булһа, өстән бере һелтеле ризыҡ тәшкил итһен. Быларҙың һәр береһе хаҡында айырым һөйләп тормайым, сөнки хәҙер мәғлүмәт сығанаҡтары күп: китап магазинынан белешмәләр һатып алырға ла, интернеттан ҡарап белергә лә мөмкин.

Сирҙәрҙең күбеһе дөрөҫ туҡланмауҙан килеп сыға. Хәҙерге заман кешеһенең эсе тулы лайла булыуын күптәр үҙҙәре белмәйҙер ҙә әле. Эске ағзаларҙың лайла менән көпләнеүе матдәләр алмашыныуының боҙолоуына килтерә, гастрит, холецистит, панкреатит кеүек процестар башлана. Быға тап ана шундай лайла барлыҡҡа килтерә торған майлы ит, сыр, дөгө, шәрбәт, аҡ икмәк кеүек ризыҡтарҙы йыш ҡулланыу сәбәпсе булып тора. Тимәк, аш һеңдереү эшмәкәрлеген ризыҡ боҙған икән, уны дарыу ҙа, табип та түгел, ә икенсе төрлө ризыҡ дауаларға тейеш, юғиһә, беҙ йәшелсә, шифалы үләндәр хаҡында онотоп китәбеҙ.

Иҫебеҙгә төшөрәйек әле: борон ата-бабаларыбыҙ яҙға аяҡ баҫҡас та ете көн рәттән балтырған, кесерткән, ҡуҙғалаҡ, йыуа һәм башҡа шуның кеүек үләндәрҙән йәшел аштар әҙерләп ашаған. Белмәй эшләмәгән бит улар быны. Еҫле балтырған, мәҫәлән, ҡан әйләнешен яҡшырта, лайланы бөтөрә, шулай уҡ төрлө файҙалы элементтарға ла бай. Бынан тыш, кеше тәүлегенә кәүҙә ауырлығының 1 килограмына 31-32 мл иҫәбенән һыу эсергә тейеш. Минераль һыуҙан "Ессентуки" һыуҙары яҡшы.

Әйткәндәй, һәр байрам, ҡунаҡ табыны алдынан бахырҡай ашҡаҙан, бауыр-бөйөрҙәрҙең ҡото осоп торалыр инде ул: ниҙәр генә күрербеҙ, тип... Юғиһә бит, байрамдарҙа, ҡунаҡҡа барғанда ҡолап киткәнсе ашап-эсеүселәр байтаҡ арабыҙҙа. Ә ниндәй файҙалы, мауыҡтырғыс итеп үткәрергә була байрамдарҙы: балалар менән уйындар ойоштор, уйна, йырла, бейе (тик айыҡ башҡа, әлбиттә). Бөтәһе лә кешенең үҙ ҡулында. Унан һуң - хәрәкәт тураһында. Беҙ ифрат ялҡауға әйләндек. Хәрәкәттә - бәрәкәт, тип белмәй әйтмәгән халҡыбыҙ. Бына япондар, мәҫәлән, ни өсөн оҙаҡ йәшәй? Иғтибар итһәгеҙ, улар араһында йыуан ҡорһаҡлы, һимеҙ кешеләр юҡ, тип әйтерлек. Беренсенән, улар дөрөҫ һәм сама белеп туҡлана; икенсенән, күп хәрәкәтләнә: улар дөйөм алғанда көнө буйына 9-10 км ара үтә. Ә беҙ бер-ике туҡталыш өсөн дә автобус көтөп торабыҙ.. Һәм, ғөмүмән, күберәк йәйәү йөрөһәң, араҡы эсмәһәң, тәмәке тартмаһаң, кешегә яҡты йөҙ менән тороп, яҡшы һүҙенде йәлләмәһәң - сәләмәт йәшәү ана шул инде ул...

**Марат РӘЖӘПОВ.**

*✓ Тирә-яҡҡа бешкән үләндең хуш еҫтәре тарала. Тән бешмәслек булғас, эҫерәк булһа, һалҡын үлән дә ҡушып, быҡтырылған үләнгә баштан-аяҡ күмеләләр. Үләндә ятҡанда кешенең бөтә тәне күмелергә тейеш ине.*



УЙЛЫҒА -УЙ

# СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫМ, ТИҺӘҢ...

**Яуыз һәм һөмһөрө ҡойолоп йөрөгәндәргә ҡарағанда изгелекле, шаян, күтәренке күңелле кешеләрҙең табиптарға һирәгерәк мөрәжәғәт итеүен ғалимдар күптән иҫбатланы инде. Питер Брюггер етәкселегендәге Швейцария ғалимдарынан бер төркөм был юҫыҡта тикшеренеүҙәрҙе артабан дауам иткән.**

Ғалимдар ҡыҙыҡлы ғына бер тикшеренеү үткәргән. Үҙ теләктәре менән килгән кешеләрҙән оптимистар һәм пессимистар төркөмдәре туплап, уларға грипп сиренә ҡаршы прививка эшләгәндәр. Бер айҙан шул асыҡлана: пессимистарҙа грипка ҡаршы антиматдәләр оптимистарҙыҡына ҡарағанда күпкә аҙыраҡ бүлепеп сыға икән дә! Өс көндән мыжыҡтарҙың 70 проценты грипп менән ауырый ҙа башлай, ә шат күңелленәр араһында был һан 30 процентҡа ла етмәгән. Һығымта бер генә: йышыраҡ йылмайығыҙ, шат-күңелле булығыҙ һәм бер нәмәгә ҡарамаҫтан, яҡшылыҡ хаҡында ғына уйлағыҙ!

♦ Һуңғы ваҡытта медиктарҙың күпселеге ҡурҡыныс сирҙәрҙең, шул иҫәптән яман шеш ауырыуҙарының сығанағы беҙ күңелдә йылдар буйы һаҡлап йөрөткән асыу һаҡлау икәненә нығыраҡ инана бара. Берәүҙәр тормошонон үҙе теләгәнсә килеп сыҡмауына яҙмышынан зарлана; икенселәр - дуҫлыҡҡа хыянат иткән әхирәтенә; өсөнсөләр - башҡа йәр тапҡан һөйөклөһөнә; дүртенселәр - ышанысты аҡламаған балаларына үпкә йөрөтә. Күп кеше бурысҡа аҡса биреп тормаған күршеһенә, хаҡһыҙ рәүештә эштән сығарған начальнигына асыу тота. Үпкә һаҡлаған кеше үҙенә нимә тип әйткәндәрен гел иҫендә тота, күңеленән генә дошманына һораүҙар бирә һәм үҙен яҡлап эстән яуаплай - ҡыҫҡаһы, күңеленән генә диалог алып бара. Күңелһеҙ хәлдәрҙе башында ҡабат-ҡабат уралтып, ниндәйҙер бер энергетик бау барлыҡҡа килтерә, һәм шуның аша үҙенең ғүмер ҡеүәте сығып китеүен һиҙмәй ҙә ҡала. Шуға күрә лә асыу һаҡлап йөрөүсе агрессив, ғәфү итә белмәгәндәр изгелекле кешеләргә ҡарағанда йышыраҡ сирләй һәм аҙыраҡ йәшәй икәненә бер ҙә аптырарға түгел. Тәбиғәттә шундай бер ябай ҡағиҙә: яҡшыһын - яҡшыны, ямандың яманды тартыу көсө бар. Әгәр һеҙ үпкә тотоп, юҡ-барға ла көйөп йәшәйһегеҙ икән, тора-бара ниндәйҙер бер асыу йомғағына оҡшап ҡалыуығыҙ ҙа бар. Тиҫкәре энергетикағыҙ теңкәгеҙгә тейеүсе яңы агрессив кешеләр, яңы асыу һәм үпкә тойғолары тартып килтерәсәк һеҙгә. Был хәлдән нисек сығырға һуң? Үпкәләүҙәрегеҙҙе онотоғоҙ, бөтәһен дә, шулай уҡ үҙегеҙҙе лә ғәфү итегеҙ. Көнөгеҙҙө йылмайып ҡаршылағыҙ, кешеләргә изгелек ҡылығыҙ һәм улар хаҡында тик яҡшы уйлағыҙ. Тормошҡа ҡыуанырға өйрәнегеҙ һәм үҙегеҙҙе ыңғайға көйләгеҙ. Яҡшы уйҙарығыҙ үҙегеҙгә фәҡәт яҡшылыҡты тартыр, энергетикағыҙҙы көйләр. Шул саҡта сир-сырхауҙарығыҙ ҙа юҡҡа сығыр.

♦ Һүҙ - турғай түгел, ләкин беҙ йыш ҡына был әйтемдең мәғәнәһе хаҡында уйлана һалмайбыҙ. Шаярып ҡына булһа ла ниндәйҙер ярамаған нәмәләр тураһында әйтәбеҙ, тик уның һаулыҡҡа зыян килтереү ихтималлығы хаҡында уйламайбыҙ. Мәҫәлән, тормоштан шундай бер миҫал. Марина Петровнаның ире бик ныҡ эсә ине, шуға үртәлеп, ҡатын гел генә: "Һине күргем килмәй", - тип ҡабатлай торғайны. Бер нисә йылдан ул тома һуҡырайып ҡалды. Катаракта башланып, сире ҡатмарлашып китә, ә дауаланыу бер ниндәй файҙа килтермәй. Шуға, ана шундай һүҙҙәрҙе, шулай уҡ "Һине ишеткем дә килмәй", тип әйтеүҙән һаҡ булығыҙ. Былар бит, ысынлап та, организмға шундай йүнәлеш биреүе ихтимал. Йә булмаһа, ныҡ ҡурҡҡан саҡта "Саҡ йөрәгем ярылманы", йә "Инсульт була яҙҙы", тип әйтеүҙән дә тыйылығыҙ, сөнки былар ябай ғына һүҙбәйләнештәр түгел, ә организмға бирелгән йүнәлеш булып сығыуы ла бар. Тағы ла шуның кеүек "Йөрәккә таш булып ятты", "Тамаҡҡа арҡыры торҙо", "Аҡылдан яҙам инде", "Ер аҫтына инеп китер инем" тигән уйланылмаған мәғәнәле һүҙ һәм һөйләмдәрҙе онотоғоҙ. Шул уҡ ваҡытта һис бер һүгенмәгеҙ, кешеләрҙе яман, төртмә һүҙҙәр менән рәнйетмәгеҙ. Былар һәр төрлө тамаҡ-курылдай, ҡыҙыл үңәс сирҙәренә дусар итеүе бар. Һаҡ булығыҙ!

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ТӘНЕҢ ҺЫҘЛАҒАНДА...



## үлән боҫона ят

**Ауылдағы тулҡын-тулҡын ябырылған эш араһында, йәйге йылы, елһеҙ көндә, ауыл ҡатын-ҡыҙҙары йылға ярындағы ҡомлоҡҡа, ер буйына йәки, үҙҙәре әйтмешләй, үләнгә ятырға йыйыла торғайнылар.**

Күңелле лә, үҙенә күрә мәшәҡәтле генә ғәмәл ул үләнгә ятыу. Был сараға ҡара яҙҙан, бер-береһенә хәбәр итеп йыйыналар. Кемгәләр был дауаны ҡулланып ҡарарға кәңәш итәләр, берәүҙәрҙе теләнә лә кире һүрәләр. Көнөн дә алдан тәғәйенләп, билдәләп ҡуялар. Сөнки ниндәйҙер үлән сәскә атмаҫ элек, ҡайһыларының гөрләп сәскә атҡан сағына тап килтереү кәрәк ине. Күберәк картуф утарҙан алдараҡ ваҡытты самалайҙар ине. Әйтелгән көндә ел булһа, ваҡытын күсерәләр. Берҙән, ут яғыуы ҡурҡыныс буласаҡ, икенсенән, ҡайтҡанда ел һуғыуы мөмкин.

Бер нисә көн алдан уландар билдәләнгән урынға ҡоро ерек ағастарын ташып ҡуя. Урынын да кеше ҡүҙенә салынмаҫлыҡ, ҡомло йылға ярында һайлайҙар.

Был көнгә аҙна самаһы ваҡыт ҡалғас, беҙҙең ҡапҡа ябылмай. Әсәйем берәүҙәренә үҙе менән нимә алырға кәрәклеген әйтә, әҫпеһе бармы-юҡмы икәнен белешә. Икенсеһенә яңы бысылған ҡарағай әпилкәһен тоҡтарға тултырып алып барырға кәңәш бирә. Ул саҡта шиптыр тоҡсайҙар булманы, ризыҡты һауыттарға түгел, иҫке гәзиттәргә төрөп алалар. Ауыр ризыҡ ашамаҫҡа, шулай уҡ ас та булмаҫҡа кәрәк, тип иҫкәртәләр. Беҙ, ҡыҙҙар, әсәйҙәрҙең кәрәк-ярағын күтәрешеп, арттарынан эйәрәбеҙ. Ярҙамға үҙҙәре үк саҡыралар. Барғас та кеше һанына ҡарап, ҡомда кеше инеп ятмалы соҡорҙар ҡаҙыла. Уларға ерек ағасын тултырып ут яғалар. Уттағы баҡырсаларҙа сәй ҡайнай. Кемдер салғы менән үлән саба. Үләнде йылға ярына алып килгәс, кәрәкмәгәнен айырып алып ташлайҙар. Ташланған төймәләй һары сәскәләрҙе йыйып, беҙ башыбыҙға таж үрәбеҙ. Матур булһа ла, ул сәскәләрҙе айырып алып ташлайҙар ине, ярамағандыр инде. Күмәкләшеп тәмлекәстәр менән сәй эсеп алғас, баҡырсаларҙы тағы ҡайнатырға ҡуялар. Сөнки үләнгә ятҡанда һыуһағандарға сәй эсерергә кәрәк була. Был ваҡытта һыуыҡ айран, һыу эсергә ярамай. Ут һүрелгәс, баҙырап ятҡан ҡуҙҙарҙы айырым бер урынға өйәләр, артығын йылғаға ташлайҙар. Сабылған йәш үләнде шул соҡорға тултыралар ҙа, өҫтөн кейемдәр менән баһырып ҡуялар. Үләнде тигеҙ быҡһын өсөн әленән-әле болғап торорға кәрәк. Үлән соҡоронан сыҡҡас, сайынышлырып алыр өсөн өйөлгән ҡуҙҙар өҫтөнә биҙрәләр менән йылытырға һыу ҡуялар.

Тирә-яҡҡа бешкән үләндең хуш еҫтәре тарала. Тән бешмәслек булғас, эҫерәк булһа, һалҡын үлән дә ҡушып, быҡтырылған үләнгә баштан-аяҡ күмеләләр. Үләндә ятҡанда кешенең бөтә тәне күмелергә тейеш ине. Аяғын йәки ҡулын сығарып ятырға ҡушманылар, һыҙлауға ҡала тип белделәр. Кемдең үләнгә аллергия, үлән урынына ҡарағай әпилкәһе һалалар ине. Беҙ, ҡыҙҙар, дауаланыусыларҙың эргәләрендә ярҙам итешәбеҙ. Быҡтырылған үләндең эҫерәк тәнгәленә һыуыҡ үлән тығабыҙ, һауа үтһә, өҫтөнә ябабыҙ, һыуһаһалар, йылы сәй бирәбеҙ. Һәр кеше үҙенең хәленә ҡарап ята, артығы кәңәш ителмәй. Дауаланып бөтөп торғас, әҙер йылы һыу менән сайынып, ҡоротонғас, дауаланыусылар йылы ғына итеп кейенеп алалар. Уларға ике-өс көн елдән, һалҡындан һаҡланып йөрөргә ҡушыла. Аҙаҡтан ятҡан, ултырған ерҙәренә рәхмәт уҡып, тәбиғәттен, тирә-яҡтың именлеген теләп ҡайтырға ҡуҙғалалар...

Бына шундай ҡыҙыҡ, күңелле дауаланыу сараһын ҡуллана ине элек ололар. Быуындар, бил һыҙлағанда, ҡатын-ҡыҙ ауырыуынан, ҡатыу ҡалҡҡанда, бәүел тотмағанда килешә был дауа, ти торғайнылар. Ә әҫпеһе (аллергия) булғандарға, йөрәге, башы ауырығандарға кәңәш ителмәй ине. Хатта тирә-яҡ ауылдарҙан әсәйемә үләнгә һалыуын һорап килеүҙәренә ҡарағанда, файҙаһы булғандыр. Күптәренә өйрәтеп ҡайтара ине әсәйем. Һуңғы йылдарҙа ауыл кешеһенең ошондай дауалауҙы ҡулланғанын ишеткән юҡ. Был алымды ла, башҡа күп дауалау алымдарын да тергеҙергә кәрәк ине ул. Ә һеҙ ниндәй халыҡ дауаларын беләһегеҙ?

**Гөлдәр КӘЛИМУЛЛИНА.**
**Йылайыр районы.**

ДАУА - АЯҠ АҪТЫНДА

# ТЫНЫҢ ҠЫҪЫЛАМЫ?



## Ҡайын япрағы ярҙам итә

**Был арала йәй йыйған үләндәремә ревизия яһап алдым әле. Ниәтем ҡайын япраҡтарын табып алыу ине. Бик ихтирам менән ҡарайым мин яңы ғына бөрөһөнән сығып килгән, йәбешкәк, ыуыҙ ғына сағында йыйылған ҡайын япрағына. Бик ауыр эш ул мәлдә был япраҡтарҙы йыйыу. Берҙән, мәле бик ҡыҫҡа ғына. Икенсенән, йыйғанда ҡайын ағасының эргәһендә ҡырмыҫҡа ояһы юҡмы икәнен тикшерергә кәрәк. Сөнки ҡырмыҫҡа ояһы яҡын икән, ул ҡайындан япраҡ алып булмаясаҡ. Ҡырмыҫҡалар ағастың һәр бер япрағын һырыған була (Ҡайын япрағының шифалы икәнен улар ҙа беләләр инде). Бер устай ғына япраҡ йыйям тиһәң, әллә нисәмә ағасты үтеп сығырға кәрәк.**

Ни өсөн ҡыш уртаһында ҡайын япраҡтарын иҫемә төшөрҙөм һуң? Бер заман үҙемдең баҫҡыстан өҫкә менгәндә ыһылдап тын алғанымды, тын ҡыҫылыуын һиҙеп ҡалдым. Аһ, мин йәш бит әле, әле үк ыһылдап йөрөһәм инде, тип, Рим Әхмәдовтың "Одолень трава" китабын уҡып сыҡтым. Тын ҡыҫылыуға яңы ғына бөрөнән сыҡҡан ҡайын япрағы, шулай уҡ алҡалары (тычинка тигәне) ярҙам итә, уны ике ай тәнәтеп эсергә, тиелгән.

Яҙ еткәс, шул осорҙо эләктерҙем бит. Ҡайын бөрөһөнән япраҡ тиртеү ике-өс көн генә дауам итә. Йыйҙыҡ. Эстем. Ысынлап та килеште. Хәҙер оҙон дистанцияға ла ыһылдамай йүгерә алам. Ә ҡайын япрағын йыйыуҙы дауам итәм. Профилактика өсөн.

Тағы ла бер үҙенсәлеге бар уның. Япраҡты сынаяҡта тәнәткәндә бысаҡ осо менән генә сода өҫтәп ебәрһәң, япрактар бетулин тигән матдәһен бүлеп сығара, был эсемлек лямблия тигән нәмәнән дә дауа булып тора. Лямблиялар - нәҙек эсәкте һәм бауырҙы зарарлаусы паразиттар (улар һыу, аҙыҡ-түлек, йыуылмаған еләк-емеш аша күсә. Көнкүрештә кейемһалым, һауыт-һаба, балалар уйынсыҡтары, йорт хайуандарының йөнө, кимереүселәр аша йоғоуы мөмкин).

Ҡыҫҡаһы, яҙ етһә, һеҙ ҙә ҡайындың йәш япраҡтарын йыйырға онотмағыҙ.

**Фирүзә ХӨСӘЙЕНОВА-ӘБДРӘХИМОВА.**
**Күгәрсен районы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙҮГЕР, ӘЙҘӘ!

■ Йүгереү йөрәкте һәм ҡан әйләнеше системаһын нығытып ҡына ҡалмай, күҙҙәр өсөн дә файҙалы, ти сит ил офтальмологтары. Мәҫәлән, ул айырыуса күҙ яҫмығы тонокланып, катаракта башланғанда һәм башҡа ҡайһы бер ауырыуҙарҙан ҡотолорға ярҙам итә. АҠШ-тың Беркли биҫтәһендәге Лоуренс исемендәге милли лаборатория врачтары 41 мең йүгереүсегә ете йыл буйына тикшереүҙәр үткәргән. Һөҙөмтә шундай: ни тиклем йышыраҡ һәм ҙурыраҡ араға йүгергән һайын, уларҙың күҙҙәре әлеге сирҙәргә бирешмәйенсә, сәләмәт булып ҡала килгән.

■ Емеш-еләк сәләмәтлек өсөн ни тиклем файҙалы булмаһын, уларҙы йоҡлар алдынан ашарға ярамай, тип иҫкәртә немец ғалимдары. Емеш-еләк составында булған тәбиғи емеш шәкәре инсулин бүленеп сығыуҙы әүҙемләштерә. Әммә инсулин юғары булғанда организм төндә артыҡ майҙар менән "көрәшеүҙән" туҡтай. Тимәк, йоҡлар алдынан ашалған емеш-еләк артыҡ ауырлыҡ йыйырға ярҙам итә.

■ Израилдең Вейцман исемендәге институты ғалимдары яңы яһалма кимерсәк уйлап тапҡан. Ул ошоға тиклем медицина практикаһында ҡулланылып килгән яһалма быуын менән сағыштырғанда ауырлыҡ күтәреүҙә күпкә сыҙамыраҡ. Яңы кимерсәк - ул асылда электрҙан зарядландырылған полимер молекулалар (улар бик бәләкәй, йәғни нонокиҫәксәләр) һәм уларға йәлеп ителеүсе һыу молекулалары. Тап шулар ярҙамында быуындарҙың бер-береһе менән ышҡылыу көсө кәмей, ә ауырлыҡ күтәреү һәләте арта.

■ Зифа буйлы булырға хыялланған ҡатын-ҡыҙҙар йыш ҡына шәкәрҙән баш тартып, шәкәр алыштырыусы ҡуллана. Күптәр был шәкәр алыштырыусыны организм өсөн бөтөнләй зарарһыҙ, тип иҫәпләй. Әммә уның составындағы аценсульфам йөрәктең ағзаларҙы ҡан менән тәьмин итеү һәләтлеге кәмеүенә, цикломат бөйөр сирҙәренең көсәйеүенә килтереүе ихтимал. Шәкәр алыштырыусылар үт ҡыуығы юлдары сирҙәре менән яфаланыусыларға ла зарарлы. Ҡайһы берәүҙәр шәкәр урынына фруктоза, сорбит йәки ксилит ҡуллана, әммә улар калорияһы буйынса шәкәрҙән айырылмай. Табиптар фекеренсә, иң зарарһыҙы булып фруктоза тора, сөнки уның составында организмға зыян килтереүсе компоненттар аҙыраҡ.

■ Кембридж университеты ғалимдары белдереүенсә, депрессиянан ябай кетчуп ҡотҡара ала. Тик күңел яраларына дауа булһын өсөн кетчуп ҡағыҙға ярашлы әҙерләнергә һәм унда томат һәм ҡыҙыл борос күп булырға тейеш. Тап томат һәм ҡыҙыл бороста "бәхет гормоны" - серотонин күп. Кетчуптың шулай уҡ яман шештәргә ҡаршы тороу үҙенсәлеге лә бар, был аҙыкты яратыусылар йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә лә бирешеп бармай. Составында ликопен тигән көслө антиоксидант булыуы ла томатты файҙалы ризыҡтар исемлегенә индерергә мөмкинлек бирә. Ликопен яман шешкә тәьсир итеү көсөнә эйә, ул үҫемлек майы менән яҡшыраҡ үҙләштерелә. Тап ликопен томатҡа сағыу төҫ бирә лә инде. Фруктоза, глюкоза, шулай уҡ минералдар тоҙҙар - магний, йод, цинк, натрий, тимер, марганец, А, В2, В6, К, РР, Е витаминдары нервылар системаһы эшмәкәрлегенә лә яҡшы йоғонто яһай. Томаттың тышы ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлеген әүҙемләштерә, орлоҡтары ҡанды шыйығайтыусы матдәгә бай, һөҙөмтәлә, тромбоз барлыҡҡа килеү хәүефе түбәнәйә. Томат ни тиклем яҡшыраҡ бешкән, унда файҙалы матдәләр ҙә күберәк була. Шулай уҡ ҡыҙыл томат һарыһына ҡарағанда күпкә файҙалыраҡ.

ТОРМОШ ҺАБАҠТАРЫ

# ХӨКӨМ ИТЕРГӘ АШЫҠМАЙЫҠ



**"Бынау әҙәмдәр ниңә шул тиклем янъял ҡуптара инде? Әйтерһең дә, заман ахыры. Талон алғас, барыбер врачҡа инәләр бит инде", - тине эргәмдә ултырған оло йәштәрҙәге апай. Ысынлап та, һәүетемсә генә үҙ сиратын көтөп ултырғандар араһында оло ғауға сыҡҡайны. Кемдер алдан шылтыратып, электрон сиратҡа яҙылған, икенселәр регистратура аша талон алған да, кем әйтмешләй, "живой" сират булдырған.**

Әйткәндәй, күптәрҙең ҡабул итмәүе йәғни ышанып етмәүе сәбәпле, электрон яҙылыу системаһы тулыһынса үҙ көсөнә инеп китә алмай әле. Шунлыҡтан врачтың ҡабул итеүен көткәндәр араһында һәр ваҡыт ниндәй ҙә булһа аңлашмаусанлыҡ килеп сыға. Хатта ике ҡатын саҡ һуғышып китмәне.

- Иң ҡурҡҡаным - ғауға, кеше талашҡан урын, - тине лә эргәмдәге теге апай тороп уҡ китте, уның артынса уҡ ҡултыҡ таяғына таянған йәш ир ҡуҙғалды. Тауыш тынғас ҡына әйләнеп килде улар.

Сираттағылар был мөләйем аралашҡан икәүгә ҡыҙыҡһыныуын йәшермәй: улы тиһәң, икеһе ике милләттән. Аптыраған икән, ире башҡа милләттәндер, тиер кемдер. Әммә йөҙҙәрендә лә оҡшашлыҡ юҡ һымаҡ. Ире тип әйтер инең, бигерәк йәш. Миңә лә бик ҡыҙыҡ күренде.

- Улым да, ирем дә, һөйәркәм дә түгел ул, әммә бер-береб еҙгә бик кәрәкле, бер-беребеҙгә терәк булған кешеләр, - тине ҡатын, минең уйымды һиҙгәндәй һәм ҡыҫҡаса үҙенең тормошон бәйән итте.

...Быға тиклем уларҙың икеһе лә күрше ҡалала йәшәгән икән. Ҡатын ҙур уҡ түрә булмаһа ла, һәр ваҡыт дәрәжәле вазифа биләгән. Ире йәшләй фажиғәле үлеп ҡалғас, балама мәрхәмәт күрһәтмәҫ тип, башҡаса тормошҡа ла сыҡмаған, берҙән-бер улын яңғыҙы тәрбиәләгән.

- Бөтә яңылышлығым шунда булды. Атайлы балаларҙан кәм булмаһын тип, һорағанды әйберен алып бирҙем, бөтә тапҡан-таянғаным уның үтенестәрен ҡәнәғәтләндереүгә китте. Шуғалырмы, бик иркә, үҙ һүҙле, ялҡау булып үҫте. Әрме хеҙмәтенән ҡурҡҡас, унан да алып ҡалдым. Тик ул ғына тырышлыҡтарыма изгелек түгел, ә яуызлыҡ менән яуап ҡайтара торған кеше булып сыҡты. Этеп-төртөп уҡып сығыу менән бер ҡайҙа ла эшкә урынлашырға ашыҡманы. Урынлашһа ла, оҙаҡ тотҡарланманы. Уның ҡарауы, күңел асыу, кәйеф-сафа ҡороу яратҡан шөғөлөнә әйләнде.

Холоҡ-фигелендә үҙгәреш булыуын һиҙә инем инде, әммә наркотик менән мауығыуын бик һуңлап аңланым. Белгәс тә, тәкәбберлегемә баш була алмай, үҙ күҙемә, ҡолағыма ышанманым әле. Әшнәләрен өйгә алып ҡайтып, шағараҡ ҡора башлағас ҡына ниндәй упҡын алдында торғанымды аңланым.

Тәүҙә был бәхетһеҙлегебеҙ менән яңғыҙым көрәштем, һуңынан ярҙам һорап, тәрлө органдарға мөрәжәғәт иттем. Һөҙөмтәлә көҙгө һыуыҡ ҡараңғы бер төндә үҙ өйөмдән ҡыуып сығарҙы. Сығып та китмәҫ инем, бәлки, хәҙер үҙендә "энә"гә ултыртам, тип килә баҫлағас, яланаяҡ, йоҡо күлдәгендә генә сығып йүгерҙем. Машина аҫтына ташланыу, бейектән һикереү, аҫылыныу тигән уй башыма ла килмәне, сөнки мин был донъянан китһәм, улымды кем ошо афәттән аралар, тип ҡурҡтым.

Үҙем дә аңламаҫтан ҡаршы йорттағы таныш подъезға йүгерҙем. Унда яңыраҡ ҡына мәрхүм булған танышымдың тыумыштан ғәрип улы яңғыҙы ғына йәшәй.

- Улым, зинһар өсөн бер нәмә лә һорама, таң атҡансы һиндә ултырып торорға рөхсәт ит инде, - тип егеттең ризалығын да алып тормай, эскә үттем. Һуңынан ғына белдем: танышымдың улы шул ямғырлы көҙгө төндә: "Шул тиклем бәхетһеҙ итеп яралтҡас, был донъяға ниңә тыуҙырҙың? Нимә өсөн йәшәйем һуң? Кемгә кәрәкмен мин?" - тип мәрхүмә әсәһенәме, Аллаһы Тәғәләгәме хат сыймаҡлап, үҙ-үҙенә ҡул һалырға йыйынған ваҡытта ишек шаҡыған булғанмын...

Таң атыуға ҡатын сәсрәп ауырып китә, температураһы күтәрелә, туҡтауһыҙ һаташа. Егеттең "Ашығыс ярҙам" саҡырырға тәҡдим итеүенә ҡырҡа ҡаршы төшә. Уның аяҡҡа баҫыуына егет үҙе түшәккә ауа. Бында инде ҡатындың ярҙамы тейә. Таң атҡансы ғына тип ингән өйҙә шулай итеп ике аҙнаға яҡын йәшәргә тура килә ҡатынға, әммә уны эҙләгән кеше булмай. Әхирәтенең кейемен кейеп, фатирына ҡайтҡан ҡатын оҙаҡ була алмай өйөндә. Бөтә бәхетһеҙлегендә әсәһен гәйепләгән улы уны тағы ҡыуып сығара. Был юлы инде ҡатын алдан әҙерләп ҡуйған сумкаһын алырға өлгөрә һәм туп-тура ҡаршы йортҡа йүнәлә.

- Танышымдың улы менән бергә булыуыбыҙға ла биш йылдан ашыу ваҡыт үткән. Кешенең тел-тешенән һаҡланыр өсөн һеҙҙең ҡалаға күсеп килдек. Ошо дәүерҙә улымды наркомания тип аталған үлем ҡосағынан йолоп алдым. Оҙайлы реабилитация үткәндән һуң бына быйыл өйләнде. Тиҙҙән өйәнем тыуасаҡ. Ә ни өсөн әхирәтемдең улы менән ҡалдыммы? Башҡаларға ҡарағанда минең ярҙамыма бөгөн ул күберәк мохтаж. Шуның өсөн дә уны яңғыҙын ҡалдырырға баҙнат итмәнем. Иң ауыр ваҡытта иңем терәгән, күңел тыныслығына эйә булырға ярҙам иткән, улымдың зарарлы ғәҙәтенә ҡаршы көрәшергә көс биргән кеше бит ул. Уға сикһеҙ рәхмәтлемен. Шуға күрә ҡулымдан килгәнсә уның көнитмешен еңеләйтергә тырышам. Күптән түгел ике ҡатмарлы операция үткәрҙе. Нисәмә йыл коляскала ултырғандан һуң, таяҡҡа таянып булһа ла, тағы аяғына баҫты. Бына өсөнсө операцияны көтәбеҙ", - тине. Шул ваҡыт врачҡа инергә уларҙың сираты етте. Ә мин сыҡҡанда коридорҙа юҡ инеләр инде...

Ошо таныш түгел ҡатындың тормош сәхифәһен тыңлағас, кешенең ҡылған ҡылығының сәбәбен тулыһынса белмәй тороп, уның тураһында фекер йөрөтөргә, хөкөм итергә ашыҡмағыҙ, тигән хәҡиҡәткә тағы бер тапҡыр инандым...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...

# ҠЫШЛАП ҠАЛҒАН...

## ун өйрәк һәм бер аҡҡош

**Көҙ көнө беҙ йылы яҡҡа табан юлланған ҡоштарҙы күҙәтергә яратабыҙ. Төрлө ҡоштар төрлөсә тупланып йылы яҡҡа оса. Ә бына моңһоу ғына ҡаңғылдашып осоп барған аҡҡоштарҙың өсмөйөшкә тартым төркөмө барыһынан да матурыраҡтыр. Был ҡоштар үҙҙәренең ауырлығы һәм көүҙә ҙурлығы менән айырылып тора. Уның ауырлығы 12 килограмға, ә ҙурлығы, ҡанаттарын йәйеп осҡан мәлдә, 2 метрға етә. Шуға күрә аҡкоштарҙың һауаны ярып осҡан тауышы беҙгә асыҡ булып ишетелеп тора. Ғөмүмән, йылы яҡҡа юлланған барлыҡ ҡоштарҙы беҙ күҙҙән юғалғансы оҙатып ҡалабыҙ. Барыбыҙ ҙа эстән генә, "тыуған яҡтарығыҙға имен-һау ғына әйләнеп ҡайтығыҙ инде", тигән теләктәр теләйбеҙ.**

Шуныһы ғәжәп, быйыл нишләптер унлап өйрәк һәм бер аҡкош йылы яҡҡа осмаҫҡа ҡарар иткән. Улар әле Ағиҙел йылғаһының төҙөлөп ятҡан мәсет тапҡырындағы йылыуында йөҙөп йөрөй (йылыу тип йылғаның туңмай ҡалған өлөшө атала). Йәй осоронда беҙ өйрәктәрҙе ара-тирә күреп ҡалабыҙ. Ә бына аҡкошто күреү бәхете бик һирәктәргә генә эләгә. Ул ояһын ҡуйы ҡамыш араһына төҙөй, шуға аҡкош күҙгә артыҡ салынып бармай. Бына бөгөн уны яҡындан күрергә мөмкинлек бар. Фотонан күренеүенсә, ҡышлап ҡалған аҡкош әле һорғолт төҫтә. Тимәк, был ҡош әле бала ғына. Аҡкош себей сағында ямаҡай ғына һоро төҫтә була, үҫә төшкәс, һорғолт көрән, ә инде ҙурайғас, ап-аҡ ҡа әйләнә. Йөҙгәндә ул муйындарын тура тотоп, үҙ баһаһын белеп, ғорур йөҙөп йөрөй. Башҡорттар өсөн изге ҡош булып иҫәпләнә. Уға атырға ярамай. Аҡкош ҡарғышы ҡаты була ти беҙҙең ха-

✓ *Ҡумыҙға бәйле шундай ваҡиға турһында ла ишеткән бар. Бөйөк Ватан һуғышына китергә повестка алған йәштәр ҡумыҙсыға килеп: "Уйна әле, еңгә, бер туйғансы бейеп китәйем", - тиер булған.*



АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

**Күгәрсен районы Мәксүт ауылы Оло Эйек тигән данлы йылғаның һул яғында урынлашҡан, ауыл советы, урта мәктәп, мәсет, өс магазин, баҙар, балалар баҡсаһы бар, ете урамының өсәүһе Бәндәбикә йылғаһының аръяғына, Иҫәнғолға киткән яҡта теҙелеп китә. Мәксүт ҡасандыр Ҡойо ауылы тигән икенсе исем дә йөрөткән, бындағы бошман-ҡыпсаҡ ырыуы башҡорттары Ишбай (Ҡолшай) тигән ауылға ла күсеп ултырған. Бөгөн Ҡолшай картала юҡ, Мәксүт үҙе лә егермеләп йортон һатыуға ҡуйған, тиҙәр. Совет осоронда гөрләп торған "Октябрьский" совхозы ерҙәре күрше Ырымбур өлкәһенән уҡталған "инвесторҙарға" йыл һайын умырып йолҡоноп алына, Мәскәүҙән килгән ҡалын кеҫәле бер "инвестор" районды 70 процент һөтөн биреп торған дүрт һыйыр фермаһын юҡҡа сығарып, иң яҡшы сыр заводын ябып, оҫта ғына итеп бөтә хужалыҡтарҙы банкрот яһаны ла, инде уңдырышлы баҫыуҙарҙы берәм-берәм күрше өлкә байҙарына ярты быуатлыҡ ҡуртымға бирә. Халыҡтың күҙе үткер. Күҙе күрә. Һүҙе генә үтмәй...**

# БӘНДӘБИКӘ РУХТАШТАРЫ



Бындай уй-фараздар хаҡында һөйләшергә килмәгәйнем мин дә, хәл белергә генә туҡтағайным. Ауыл халҡы менән һөйләшә-һөйләшә торғас, уларҙың тормош хәлдәре тураһындағы мәғлүмәт барыбер ҡолаҡҡа килеп инде. Ә шулай ҙа барыһы ла насар түгел һымаҡ. Хәҙер халыҡ араһында үҙ йүнен үҙе йүнләргә, ауыл утын һүндермәҫкә тырышыуҙар һиҙелә. Мәҫәлән, ағинәйҙәр был юҫыҡта бигерәк әүҙемдәр. Таңһылыу Сәлим ҡыҙы Хәмиҙуллина - Мәксүт ауылы "Ағинәйҙәр ҡоро"ноң етәксеһе, оҙаҡ йылдар ошо ауылдың урта мәктәбендә мөғәллимә булды, атҡаҙанған рус теле уҡытыусыһы, осрашҡанда иң тәүҙә үҙенең әхирәттәрен һанап сыҡты: "Хәлиҙә Биҡҡолова, Айгөл Килмөхәмәтова, Резедә Ҡотлобаева, Фәриҙә Фәттәхова, Гүзәл Әминева, Рәмзиә Вәлитова, Таңһылыу Вафина, тағы ла Флүзә Мәзитова, Резедә Вафина, Зөлфиә Собханғолова менән Зөлфирә Ваһаповалар ҙа килеп ҡушылыр әле", - тип өмөттәре менән дә уртаҡлашты. Һәм артабан дауам итте: "Мәксүт ауыл мәҙәниәт йортонда "Бәндәбикә" халыҡ клубы асылһа, күҙгә күренгән һәм телгә ингән күп эштәребеҙ йәнләнер ине. Мәҫәлән, Мәксүт халҡы әллә ҡасандан бирле үҙенең өҫтөнә алған бурыста: Әүлиә инәйебеҙҙең мавзолейына экскурсиялар үткәреү, ҡурғанының тирәяғын тәрбиәләп тороу, янына эскәмйә-өҫтәл ҡуйыу, бигерәк тә өңөрәйеп ятҡан шомло ҡәбер урынын әллә ҡасан уҡ һандыҡ һымаҡ ҡына ағас йәки ҡалай тимер ҡоршау менән ҡаплатып ҡуйыу уйы тынғы бирмәй. Һандыҡ һымаҡ ҡына итеп яһатһаҡ, кем ҡәбере урыны икәнен тышына яҙып, таҡтаташ ҡуйһаҡ, теләгән ғалим-археологҡа инеп-сығырлыҡ ишеген дә эшләтһәк, мавзолей эсе бермә-бер ҡотайыр ине. Юғиһә, кеше шул хәтле күп килә, йәй көндәре бигерәк тә оло юлдан үткән бер төркөм беҙгә һуғылмай китмәй. Көнөнә икешәр-өсәр төркөм килеп китә, гел бала-саға, йәштәр, туристар, ял итеүсе ғаиләләр. Һәр ҡайһыһына мәғәнәле тарих, халыҡсан ихлас йөҙ, хатта сәй-хөрмәт кәрәк. Килһендәр, күрһендәр, белһендәр. Мавзолей Башҡортостан картаһында "15-се быуат ҡомартҡыһы" булараҡ теркәлгән. Тимәк, уның биш быуатлыҡ тарихы бар. Халыҡ ил инәһен оноторға тейеш түгел. Беҙ Бәндәбикә инәйебеҙ хаҡында әллә күпме һөйләргә риза..."

Һүҙебеҙ тағы хәбәргә ялғана: "Мәксүт ауыл советы биләмәһендә "ағинәй" тигән яҡты һүҙ һәр кемгә ҡағылған кеүек - әлхәмдулиллаһ, барыбыҙ ҙа "йәшел йылан"дан йыраҡ торабыҙ, милли кейемдәр тегеп кейәбеҙ, милли аштар бешереп, бер-беребеҙгә һәм күрше ауылдарға ҡунаҡҡа йөрөйбөҙ, дини аят мәжлестәрен бик аһәңле, мөнәжәтле итеп үткәрәбеҙ, - ти Таңһылыу Сәлим ҡыҙы. - Районда үткән бер байрамдан да ситтә ҡалмайбыҙ - һәр бер ауылдың ағинәйҙәре ҡомалаҡ икмәге бешерепме, ҡорот, май, ҡыҙыл эремсек өлгөртөпмө, күстәнәскә милли башҡорт ашамлыҡтары йөрөтәбеҙ. Байрам һыйһыҙ булмай бит. Талантлы ҡыҙҙарыбыҙҙы, балаларыбыҙҙы күреп ҡыуанып ҡайтабыҙ. Әйтәйек, Ерекле ҡумыҙсылары тигән матур бер дан йөрөй беҙҙә. Сәхнәгә йә майҙанға ыҡсым ғына, һылыу ғына Ерекле ҡыҙҙары сығып теҙелһә, ҡумыҙ сиртеп ебәрһә, кеше тын да алмай тыңлап кинәнә. Ҡайҙан өйрәнгәндәр, ҡайҙан белгәндәр тап ҡумыҙ моңо һағындырғанын, тиешәләр..."

Әйткәндәй, әүәлдән ҡумыҙ сиртеү киң таралған был яҡтарҙа, оҫталары ла булған. Ҡумыҙға бәйле шундай ваҡиға турһында ла ишеткән бар. Бөйөк Ватан һуғышына китергә повестка алған йәштәр ҡумыҙсыға килеп: "Уйна әле, еңгә, бер туйғансы бейеп китәйем", - тиер булған. Таҡмаҡсыны тәҙрә төбөнә килеп, уятып сығарып, өй нигеҙенә ултыртып таҡмаҡ әйттереп, йәнә күңелдәре булғансы бейешкәндәр. Бындай хәлдәр тураһында Мәксүттә лә, райондың башҡа ауылдарында ла һөйләйҙәр. Халҡыбыҙ моң ярата, тамаша ярата бит инде.Үҙҙәрен "Бәндәбикә рухташтары" тип йөрөткән Мәксүт ауылы ағинәйҙәре лә дауам итә был традицияны, ауылдың ҡотон, утын һаҡлауға үҙ өлөшөн индерә.

**Сәрүәр СУРИНА.**





лыҡ. Был ҡоштарҙың бер-береһенә булған мөхәббәте, ғүмерлек тоғролоғо беҙҙең өсөн юғары ғаилә өлгөһө булып тора. Шуға ла беҙ йәштәргә аҡҡош мөхәббәте теләйбеҙ.

Йылыуҙа ошо аҡҡош эргәһендә унлап өйрәк йөҙөп йөрөй. Аҡҡош, бәлки, йәшлек хатаһы арҡаһында яңылышҡандыр. Ә былары нишләп күмәкләп йылы яҡҡа осмаҫҡа ҡарар иткәндер инде, сәбәбен аңлатыуы ҡыйын. Дөйөм алғанда, өйрәктәрҙең йөҙҙән ашыу төрө билдәле. Беҙҙә уларҙың утыҙҙан артығы көн итә. Әле ҡышлап ҡалырға дәрт иткәндәрҙең исеме һуна өйрәк (урыҫса - кряква) була. Был өйрәк үҙенең быжҡылдап ҡысҡырыуы менән билдәле. Ҡайһы ваҡыт ҡурайҙа тәү башлап өйрәнә башлағандарҙы, әлегә өйрәк һымаҡ быжҡылдата ғына белә, тип шаярталар. Күреүегеҙсә, фотолағы өйрәктәр бер-береһенән айырыла. Әммә улар икеһе лә бер төргә ҡарай. Сәбәбе шунда, ата һәм инә өйрәк бер-береһенән төҫтәре менән айырыла. Атаһының баш-муйын тирәһе йәшел, ә инә өйрәк тотош көрән була. Һуна өйрәк шәп оса. Осоу тиҙлеге сәғәтенә 90 километрға барып етә.

Ҡыш ошолай йылы торһа, йылыу үҙ майҙанын кәметмәһә, әлбиттә, был ҡоштар уңышлы ҡышлап сығасаҡ. Йылыуҙа уларға аҙыҡ етәрлек. Етмәһә, улар төйәкләгән урында һыу артыҡ тәрән түгел. Һыу тәрәнлеге бик мөһим, сөнки аҡҡош та, өйрәк тә сумып түгел, ә баштарын һыуға тығып аҙыҡ эҙләй. Улар һыу үҫентеләре, унда йәшәгән бөжәктәр, бәләкәй балыҡтар менән туҡлана. Әгәр ҡаты һыуыҡтар башланһа, йылыу боҙ менән ҡаплана башлаһа, ҡоштарҙың ҡышты уңышлы ҡышлап сығыуы бик икеле. Ә шулай ҙа өмөт итәйек һәм ҡоштарҙың йылы яҙға хәтлем имен-аман йөрөүҙәрен теләйек.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**
**Бөрйән районы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 7-се идея: Ҡотолғоһоҙ хаталар булмай

Һин хаталаныуҙан ҡурҡаһыңмы? Күп кешеләр хата яһауҙан ҡурҡа, кешеләр генә түгел, хатта тотош дәүләттәр. Ҡасандыр мин Уганда хөкүмәтенең радио аша һауа торошо тапшырыуҙы тыйғанын ишеткәйнем. Баҡһаң, төп халыҡ метеорологик мәғлүмәттәрҙе хөкүмәт бойороуы һымаҡ ҡабул итеп, һауа торошона тулыһынса буйһонорға кәрәк, тип аңлаған. Һауа торошо тапшырылғанға тап килмәгән осраҡтарҙа улар хөкүмәтте ғәйепләгән һәм радио аша һөйләнелгән ҡалған бөтә хәбәрҙәргә лә ышанмай башлаған. Улар, һауа торошо кеүек, бөтәһе лә алдаҡ, тигән һығымта яһаған.

Уганда хөкүмәте хәлдән сығыу юлын еңел таба. Ул радио аша һауа торошо хаҡындағы иғланды эфирға сығарыуҙы тыя. Тик был дөрөҫ һәм иң яҡшы юл булыуына шикләнәм. Ә һеҙ? Хаталанғанға күрә генә эшмәкәрлекте туҡтатыуҙан ни мәғәнә? Әгәр эштә хата ебәреп, уның менән шөғөлләнеүҙән туҡтаһаҡ, беҙ бер нәмәгә лә өлгәшә алмаҫ инек.

Әйтәйек, сабый сағында һөрөнөп йығылып, "Уф, бер нәмә лә килеп сыҡмаҫтыр инде", тип уйланың ти. Ихтимал, ул саҡта атларға ла өйрәнмәгән булыр инең. Мәктәптә ябай арифметик миҫалда хата ебәреп, өйрәнмәй, ташлап ҡуйһаң, аҡса иҫәпләргә лә, магазиндан әйбер һатып алырға ла өйрәнә алмаҫ инең.

Миңә ҡалһа, яңылышыу һәләте беҙҙең тормош тәжрибәһенең мөһим бер өлөшө булып тора, һәм әгәр беҙ хаталаныуҙан ҡурҡып, нимәнәндер ҡасһаҡ, аҡрынлап үҙебеҙҙе тормоштағы яҡшы һәм файҙалы нәмәләрҙән мәхрүм итәсәкбеҙ.

Әлбиттә, һин был дәлилде абсурд, тип әйтә алаһың. Һиненсә, әгәр үҙебеҙҙең хаталарҙа өйрәнәбеҙ икән, тимәк, күберәк хаталанырға кәрәк, ни тиклем күберәк хаталар яһаһаҡ, тормошта шул тиклем күберәк нәмәгә өйрәнәсәкбеҙ булып сыға, тип әйтә алаһың. Мин дәлилдәрҙе был йүнәлештә дауам итергә тимәйем. Ә теләгәнеңә ирешә алмауыңды "хаталанырға хаҡым бар" тип аҡлау - наҙанлыҡ, тип әйткем килә.

Үткәнеңдә ниндәй генә хаталар булмаһын, улар һинең тормош тәжрибәңдең иң мөһим бер өлөшөнә әйләнгән. Уларҙы дәртләнеү һәм яңынан эшкә тотоноу мөмкинлеге итеп файҙалан; бирешмә һәм тәү тотоноуҙан килеп сыҡмаған өсөн генә башлаған эшеңде туҡтатып ҡалма. Һәр хата тормошоңдағы һәр мәлде бөгөнгөсә аңлауға килтергән бит. Хаталарыңды ғәфү ҡыл, өйрәткән өсөн уларға рәхмәт әйт тә, күңелләнеп, яңынан тотон.

Һис шикһеҙ, яңы хаталар яһарһың, ләкин һин уларҙың һәр береһендә өйрәнәсәкһең. Ҡотолғоһоҙ хаталар булмай, тик үҙең генә уларҙы ҡотолғоһоҙға әйләндермә.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 10 ФЕВРАЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 2.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Премьера сезона. "Триггер". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Большие надежды". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00 Т/с "По горячим следам". [12+]
2.50 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]
11.00 Итоги недели (на рус. яз.).
11.45, 21.00 Специальный репортаж. [12+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 "Бәхетнамә" (на баш. яз.).
14.30 "Бай". [12+]
15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе... [6+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 Ради добра. [6+]
18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.00 Дневник хоккейного Турнира пяти наций среди юниорских сборных до 17 лет. [6+]
20.15 Дорожный патруль. [16+]
21.15 Полезные новости. [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Теге өсәү. [12+]
23.30, 5.00 Күстәнәс. [12+]
0.00 Т/с "Мужчины не плачут". Новости (на баш. яз.). [12+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Любви все возрасты покорны". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

## 11 ФЕВРАЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 2.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Премьера сезона. "Триггер". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
23.55 Право на справедливость. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Большие надежды". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00 Т/с "По горячим следам". [12+]
2.50 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]
11.15 Республика Live. #Дома. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 "Бәхетнамә" (на баш. яз.).
14.30 "Дорога к храму". [0+]
15.00, 17.45 Интервью. [12+]
15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 Тайм-аут. [12+]
18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Адмирал" (Владивосток).
22.00 По сути дела... [12+]
23.00 История одного села. [12+]
23.15 Автограф. [12+]
23.45 Земляки. [12+]
0.00 Т/с "Мужчины не плачут". Новости (на баш. яз.). [12+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Любовь на троих". [12+]
5.00 Колесо времени. [12+]
6.00 Историческая среда. [12+]

## 12 ФЕВРАЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.15, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 0.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Премьера сезона. "Триггер". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
3.30 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Большие надежды". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00 Т/с "По горячим следам". [12+]
2.50 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]
11.15 По сути дела... [12+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 "Бәхетнамә" (на баш. яз.).
14.30 "Аль-Фатиха". [12+]
15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 "Апчхи". [0+]
15.30 "АйТекә!" [6+]
15.45 "Сыйырсыҡ". [0+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 Д/ф "Пером и оружием". [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.45 Честно говоря. [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Т/с "Мужчины не плачут". Новости (на баш. яз.). [12+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Не улетайте, журавли!" [12+]
4.30 Автограф. [12+]
5.00 Земляки. [12+]
5.15 Орнамент. [6+]
5.30 Счастливый час. [12+]

## 13 ФЕВРАЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.15, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 0.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Премьера сезона. "Триггер". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
3.30 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Большие надежды". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00 Т/с "По горячим следам". [12+]
2.50 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 "Бәхетнамә" (на баш. яз.).
14.30, 23.30 Земляки. [12+]
14.45 Ради добра. [6+]
15.00, 17.45 Интервью. [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [6+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 Учим башкирский язык. [0+]
18.15 Инцидент-репортаж. [12+]
18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Спартак" (Москва).
22.00 Республика Live. #Дома. [12+]
23.00 Автограф. [12+]
23.45 Т/с "Мужчины не плачут". Новости (на баш. яз.). [12+]
1.45 Бәхетнамә. [12+]
2.45 Спектакль "Заноза". [12+]
4.30 "Бай". [12+]
5.00 Теге өсәү. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

## 14 ФЕВРАЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.25 Д/ф Премьера. "ZZ TOP: Старая добрая группа из Техаса". [16+]
2.05 На самом деле. [16+]
3.00 Про любовь. [16+]
3.45 Наедине со всеми. [16+]
5.15 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести Приволжского федерального округа.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Юморина. [16+]
23.40 Х/ф "Нелюбимая". [12+]
3.05 Х/ф "Стерва". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00 Д/с "Насекомые, или миллиметровый мир". [12+]
11.15, 18.00 "Йома". [0+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00, 22.00 Республика Live. #Дома. [12+]
12.30, 21.00, 4.15 Башкорттар. [6+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 Үткән гүмер. [12+]
14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]
14.15 "Красная кнопка". [16+]
15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 "Алтын тирмә". [0+]
16.15 "Гора новостей".
16.30 Детей много не бывает. [0+]
17.00, 6.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
19.00 Әлләсе... [6+]
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Дорожный патруль. [16+]
20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
23.00 Караоке по-башкирски. [12+]
23.30 Уфа. Живое. [12+]
0.15 Т/с "Мужчины не плачут". Новости (на баш. яз.). [12+]
2.15 Спектакль "Земляки". [12+]
4.45 Весело живем. [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]

## 15 ФЕВРАЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Анна Герман. Дом любви и солнца". [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/с "Теория заговора". [16+]
14.45 ДОстояние РЕспублики. [12+]
16.35, 19.50 Сегодня вечером. [16+]
18.35 Чемпионат мира по биатлону-2020. Спринт. 10 км. Мужчины. Прямой эфир из Италии.
21.00 Время.
21.20 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.20 Большая игра. [16+]
0.30 Х/ф "Моя кузина Рэйчел". [16+]
2.15 На самом деле. [16+]
3.10 Про любовь. [16+]
3.55 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.30 Пятеро на одного.
10.20 Сто к одному.
11.10 "Смеяться разрешается".
13.40 Х/ф "Слёзы на подушке". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Идеальный брак". [12+]
1.10 Х/ф "Мой любимый гений". [12+]

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 19.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Аль-Фатиха". [12+]
8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]
9.15 Посмотрим... [6+]
10.00 "Физра". [6+]
10.15 Преград.Net. [6+]
10.30 "Книга сказок". [0+]
10.45 "Сыйырсыҡ". [0+]
11.00 "Апчхи". [0+]
11.15 "Байтус". [6+]
11.30 Бирешмә. Йырла. [6+]
12.00 Күстәнәс. [12+]
12.30 Спектакль "Февраль. Буран". [12+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - СКА (Санкт-Петербург). [12+]
19.30 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Ради добра. [6+]
20.45 Полезные новости. [12+]
21.00 Автограф. [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Караоке по-башкирски. [12+]
22.30, 2.30 Итоги недели (на баш. яз.).
23.15 "Путь Хумай". [12+]
0.45 Т/с "Мужчины не плачут". Новости (на баш. яз.). [12+]
3.15 Спектакль "Мою жену зовут Морис". [12+]
5.30 Д/с "Насекомые, или миллиметровый мир". [12+]

## 16 ФЕВРАЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.15, 6.10 Х/ф "Зимний роман". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.20 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.15 Д/с "Теория заговора". [16+]
15.15 Д/ф "Татьяна Тарасова. "Лед, которым я живу". [12+]
16.15 Точь-в-точь. [16+]
19.05 Чемпионат мира по биатлону-2020. Гонка преследования. 12,5 км. Мужчины. Прямой эфир из Италии.
19.50 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
22.00 Премьера. "Dance Революция". [6+]
23.45 Х/ф Премьера. "Дочь и ее мать". [18+]
1.20 На самом деле. [16+]
2.15 Про любовь. [16+]
3.00 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

4.30 Х/ф "Нелюбимая". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.30 "Устами младенца".
10.20 Сто к одному.
11.10 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
12.05 Х/ф "Потерянное счастье". [12+]
14.00 Х/ф "Бумажный самолётик". [12+]
17.50 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Мама выходит замуж". [12+]

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 Большое путешествие большой семьи. [12+]
9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Бейе". [0+]
10.15 "АйТекә!" [6+]
10.30 "Детей много не бывает". [0+]
11.00 "Сулпылар". [0+]
11.30 "Гора новостей". [6+]
11.45 Бирешмә. Профи. [6+]
12.30 Итоги недели (на баш. яз.).
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.15 Башкорттар. [6+]
15.45 "Дорога к храму". [0+]
16.15, 5.30 Историческая среда. [12+]
16.45 100-летие БГАДТ им. М.Гафури. [12+]
19.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]
19.15 Лидеры региона. [12+]
19.45 Әлләсе... [6+]
20.30 Теге өсәү. [12+]
21.00, 22.30 Республика Live. #Дома. [12+]
21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).
22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
22.45 "Красная кнопка". [16+]
23.30 "Башкорт йыры". [12+]
0.30 Т/с "Мужчины не плачут". [12+]
2.00 Спектакль "Трамвай "Желание". [12+]
4.45 "Млечный путь". [12+]

✓ Ошо көндәрҙә республикала беренсе тапҡыр төбәк әһәмиәтендәге юл күрһәткесендә ауыл исеме боҙоп яҙылған өсөн дөрөҫ мәғлүмәт бирергә тейешле яуаплы хеҙмәткәргә административ эш асылғаны билдәле булды.



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ...

## утыҙ телдә яңғыраны



Сибай ҡалаһы төркөмә.

**Ошо көндәрҙә Өфөлә Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәрендә һәм сит телдәрҙә "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосын яттан һөйләүселәрҙең халыҡ-ара конкурсы үтте. Унынсы тапҡыр ойошторолған ярышта Рәсәйҙең төрлө өлкәләренән, Һиндостан, Израиль, Германия, Ҡырғыҙстан, Монголия, Франция, Үзбәкстан, Украина һәм башҡа илдәрҙән 400-гә яҡын кеше ҡатнашты.**

Быйыл конкурсанттар "Урал батыр"ҙы утыҙ телдә башҡарҙы: кемдәр баш ҡалаға килеп ҡатнашты, кемдәр видеояҙма ебәреп телмәр оҫталыҡтарын күрһәтте. Ҡатнашыусыларҙың күбеһе башҡорт һәм урыҫ телдәрендә яттан һөйләһә лә, араларында мари, татар, инглиз, ҡытай, немец, төрөк, француз, лезгин, әзербайжан, әрмән, иврит, испан, итальян, поляк, удмурт, сыуаш, украин телдәрендә яңғыратҡандары ла булды. Күп уҡыусыларҙың эпосты туған телдәренә үҙҙәре тәржемә яһауы билдәле һәм конкурсты ойоштороусы Башҡортостан социаль технологиялар институты, Республиканың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты вәкилдәре быға тик ыңғай ҡараште булды.

- Бына 10 йыл инде төрлө яҡтан бында милли кейемдәрҙә уҡыусылар, педагогтар милли музыка ҡоралдары, декорациялар алып килә һәм мәңгелек башҡорт эпосын донъяға яңынан аса. "Урал батыр" - ул Йыһан, халыҡтың иҡһеҙ-сикһеҙ уйҙары, тойғолары. Мине һәр ваҡыт эпостағы бер күренеш ғәжәпләндерә: Йәнбирҙе турһыҡтағы ҡанды тәмләгән улы Шүлгәнгә ҡул күтәргәс, Урал ағаһын яҡлап атаһына ҡаршы төшә, балаға һуғырға ярамай, ти. Аңлайһығыҙмы, ЮНЕСКО-ның кешеләргә толерантлы булыу тигән был иң төп постулаты беҙгә нисәмә быуаттар төпкөлөнән килгән! Бына ошоно конкурста ҡатнашҡан балалар бәләкәйҙән белеп, аңлап үҫә, - ти был турала ЮНЕСКО-ның баш белгесе Людмила Богуславская.

Әйткәндәй, ойоштороусылар конкурс шарттарына йыл да төрлө үҙгәрештәр индереп тора. Был, ғәҙәттә, эпосты яттан һөйләүҙән тыш, талантлы балаларға һөнәрҙәрен күрһәтеп, ижади һәләттәрен һынап ҡарауға йүнәлтелә. Быйыл да ошо традициянан ситләшмәгәндәр һәм республикала үтәсәк Бөтә донъя Фольклориадаһы-2020 сараһына арнап "Халыҡ хореографияһы", "Вокал һәм башҡарыу оҫталығы" номинациялары булдырылған. Уларҙа уҡыусылар видеояҙмалар ебәреп, ситтән тороп ҡатнашҡан. Тағы ла бер нисә тел белеүселәр өсөн "Полиглот" тигән махсус номинация булдырылған, быйыл уның сиктәрендә 17 кеше сығыш яһаған. Ярышта балалар баҡсалары тәрбиәләнеүселәре, мәктәп уҡыусылары һәм колледж студенттары ла әүҙем ҡатнаша һәм эпосты яттан белеү кимәлдәре лә төрлө. Мәҫәлән, Өфө ҡалаһының 48-се Башҡорт лицейында белем алған Сәминә Ҡолтоманова өләсәһе Сәғирә Хөсәйенова менән икенсе тапҡыр килгән. Ҡыҙ әлегә эпостың 110 юлын яттан һөйләй, думбырала уйнай һәм бында талантлы йәштәштәре менән танышып, аралаша алыуына ҡыуанып бөтә алмай. "Эпосты ятлауы ауыр түгелме?" тигән һорауға Сәминә: "Юҡ, сөнки мин башҡорт балаһы бит", - тип яуап бирҙе. Ә бына Сибай педагогия колледжының 1 курс студенты Мәҙинә Акилова "Урал батыр"ҙың 3500 юлын яттан белә.

- Эпосты бала саҡтан яратып ятлайым, был һөйөүҙе миндә өләсәйем тәрбиәләне, - тине ҡыҙ әңгәмәләшкәндә. - Төрлө конкурстарҙа ҡатнашам, был конкурсҡа икенсе тапҡыр килеүем. Бөгөн баһалама ағзаларына 700-сө юлдан алып 140 шиғри юлын һөйләп ишеттерҙем. Был конкурстың әһәмиәтен мин башҡорт балаларына үҙ туған телен, ата-бабалары мираҫын белеп үҫтереүгә йүнәлтелгән булыуында күрәм. Бөтә мосолмандарға "Ҡөрьән" китабы ни тиклем ҡәҙерле булһа, башҡорттарға ла "Урал батыр" эпосы шул ҡәҙәре ҡиммәт.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Юҡҡа ғына йыл да бер тиҫтәлек тарихы булған конкурста ҡатнашырға теләүселәр һаны кәмемәүенә ғәжәпләнерлек түгел. Сөнки бала йәнле ойоштороусылар береһен дә ярыштан буш ҡул, китек күңел менән ҡайтарғаны юҡ. Шуға ла конкурстың номинациялары ла күп, еңеүселәре һәм маҡтау ҡағыҙҙары, иҫтәлекле бүләктәр алыусылары иҫәпһеҙ-һанһыҙ. Быйыл да һәр номинацияла беренсе урын яулаусылар ғына өсәр кеше булды. Мәҫәлән, "Урал батыр" эпосын башҡорт телендә һөйләүселәр араһында Аҫҡын ауылынан Илнара Ғайбатова, Стәрлетамаҡ районы Золотоношка ауылынан Айтуған Мөхәмәтйәнов, Сибай гимназия-интернатынан Көнһылыу Солтанғужина еңеүсе тип табылды. Ә халыҡ бейеүҙәре, йырлау һәм музыкаль инструменттарҙа уйнау оҫталыҡтары буйынса алтышар беренсе урын алыусылар билдәләнгән! Урал батырҙың данын бөтә донъяға таныҡҡан, аманатын йәш быуындың аңына һалыуға йүнәлтелгән сараның башҡаса булыуын күҙ алдына ла килтереп булмай. Киләсәктә ошо яҡшы эш тағы ла киңерәк ҡолас йәйеп, дауам итһен, тип теләргә генә ҡала.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Февраль (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 10 (16) дүшәмбе | 7:22 | 8:52 | 13:30 | 16:39 | 18:09 | 19:39 |
| 11 (17) шишәмбе | 7:20 | 8:50 | 13:30 | 16:41 | 18:11 | 19:41 |
| 12 (18) шаршамбы | 7:18 | 8:48 | 13:30 | 16:43 | 18:13 | 19:43 |
| 13 (19) кесе йома | 7:16 | 8:46 | 13:30 | 16:45 | 18:15 | 19:45 |
| 14 (20) йома | 7:13 | 8:43 | 13:30 | 16:47 | 18:17 | 19:47 |
| 15 (21) шәмбе | 7:11 | 8:41 | 13:30 | 16:49 | 18:19 | 19:49 |
| 16 (22) йәкшәмбе | 7:09 | 8:39 | 13:30 | 16:52 | 18:22 | 19:52 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

## БОҘОП ЯҘҘЫҢМЫ? ШТРАФ!

Ҡулың менән эшләгәнде - иңең менән күтәр, тип халҡыбыҙ юҡҡа ғына әйтмәгән. Юҡһа, теге йәки был атамала, алтаҡталарҙа хаталар күрәбеҙ, был хаҡта әллә күпме яҙылыуға һәм һөйләнелеүгә ҡарамаҫтан, йөк һаман да урынында тора ине. Әммә ошо көндәрҙә республикала беренсе тапҡыр төбәк әһәмиәтендәге юл күрһәткесендә ауыл исеме боҙоп яҙылған өсөн дөрөҫ мәғлүмәт бирергә тейешле яуаплы хеҙмәткәргә административ эш асылғаны билдәле булды. Хатаны Росреестрҙың Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы үҙенең тикшереү саралары барышында асыҡлаған.

Росреестрҙың төбәк идаралығының геодезия һәм картография бүлеге начальнигы Зөһрә Сәйетгәрәева аңлатыуынса, географик объекттарҙың бер атамаһын икенсеһенә үҙаллы алмаштырыу, географик атамаларҙы боҙоп яҙыу рөхсәт ителмәй. Бының өсөн вазифалы кешеләргә 2-3 мең күләмендә административ штраф ҡаралған.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**11 февраль "Әлифбанан бер себеш"** (А. Кивиряхк), монодрама. 12+

**12, 13 февраль "Февраль. Буран..."** (З. Бураҡаева), шағир иленә сәйәхәт. 12+

**14 февраль "Эҙләнем, бәгерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+

**15 февраль "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 18.00 12+

**16 февраль "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**12 февраль "Башҡорт туйы"** (М. Буранғолов), романтик драма. 12+

**13 февраль "Р"һыҙ ҡалған Мырҙабай"** (З. Фәйзуллина), әкиәт. 11.00 0+

**"Мөхәббәт һәм нәфрәт"** (З. Биишева, И. Казакова), музыкаль риүәйәт. 12+

**15 февраль "Р"һыҙ ҡалған Мырҙабай"** (З. Фәйзуллина), әкиәт. 14.00 0+

**16 февраль "Волшебная мельница"** (М. Кәрим, И. Кәримов һәм Г. Сапгир инсценировкаһы), әкиәт. 12.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**15 февраль "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен), әкиәт. 12.00, 14.00 0+

**"Лиса-сирота"** (О. Штырляева), башҡорт халыҡ әкиәте. 16.00 0+

**16 февраль "Слоненок"** (Р. Киплинг), музыкаль спектакль. 12.00, 14.00 0+

**"Лиса-сирота"** (О. Штырляева), башҡорт халыҡ әкиәте. 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**13 февраль "Ғүмер ҡоралым - ҡурай"** Р. Биктимеровтың юбилей концерты. 6+

**15 февраль Музыку слушаем вместе"** 11.00, 13.00 0+

**16 февраль "Джаз для детей и не только"** О. Киреев һәм "Орлан" ансамбле. 15.00 0+

*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ*

## ДҮРТ АҘЫҠ...

**Табиптар, самаһын белеп ҡулланмаған осраҡта, үлем ҡурҡынысы менән янаған дүрт аҙыҡтың исемлеген атаған. Беҙ көн дә тиерлек ҡулланған ҡәҙимге аҙыҡтар саманан тыш миҡдарҙа ашаған-эскән осраҡта һәр кешегә төрлө кимәлдә хәүефле булыуы бар.**

Исемлектә беренсе булып сейә емеше тора. Сөнки уның һөйәгендә кеше ғүмере өсөн айырыуса хәүефле "цианид" тигән ағыулы матдә бар. Бер нисә бөртөк сейә һөйәген йотоп ебәреүҙән бер нәмә лә булмаҫ, әммә уның тосон ашау үлемгә килтереүе мөмкин. Табиптар иң хәүефле эсемлек тип һыуҙы ла атаған. Кеше өсөн 6 литр һыу эсеү үлемесле һанала, сөнки организмдың күҙәнәктәре шешенә башлай һәм тәнде көҙән йыйырыуға, баш ауыртыуына килтерә. Шул уҡ ваҡытта аҙ миҡдарҙа һәм самалап ҡына шыйыҡлыҡ эсеү файҙалы тип иҫәпләнә. Ҡәһүә - наркотик матдәләргә оҡшаш үҙенсәлекле матдә, уға кеше организмы тиҙ арала өйрәнеп китеүе күптән дәлилләнгән. Бынан тыш, артыҡ күп ҡәһүә эсеү йөрәк тибешен йышайта, был үҙ сиратында кешенең хәл-торошона ла насар йоғонто яһай. Тағы ла һаҡлыҡ менән генә ҡулланыла торған аҙыҡ - шоколад. Уның составындағы теобромин матдәһе артыҡ күп шоколад ашаған осраҡта кеше организмына ауыр тәьҫир итеүе бар. Табиптар тикшеренеүҙәр үткәреп, шоколадтың стандарт 85 плиткаһы үлемесле доза булыуын асыҡлаған. Шуны иҫтә тоторға кәрәк: табиптар үҙ миҫалында бындай тәжрибәләр үткәреүҙән ҡәтғи тыя.

*✓ Насарҙы күрмәҫ борон яҡшының ҡәҙере юҡ, ҡартлыҡты күрмәҫ элек йәшлектең ҡәҙере юҡ.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



АФАРИН!

# СИБАЙ АРТИСТАРЫ ТАМАШАҺЫ...

## һәр кемдә булған рухты уята белә



**Сибайҙарҙан беҙ һәр ваҡыт ниндәйҙер яңылыҡ, әһәмиәт һәм танһыҡлаған рух һулышын көтөп өйрәнгәнбеҙ. Һәм улар беҙҙе шул рух менән тәьмин итә лә. Был юлы ла шулай булды: көтөлгән, теләгән, күңел талап иткән барлыҡ хис-тойғолар ҙа урын тапты сәхнәлә. Һүҙебеҙ Сибай концерт-театр берекмәһенең Өфө сәхнәһендәге яңы программаһы хаҡында.**

Сираттағы гастролдәрендә Сибай артистары баш ҡала тамашасыһын "Батырҙарын данлар илем бар" тип аталған музыкаль тамаша менән ҡыуандырҙы. Тамашаның сценарий авторы - яҙыусы, драматург Наил Ғәйетбаев, музыка яғынан биҙәүсеһе - композитор Нур Дауытов, әҫәрҙе сәхнәгә ҡуйыусыһы - режиссер Рөстәм Хәкимов. Бындай етди исемдәр үҙҙәре үк концерттың еңел-елпе генә булмаҫын да, ниндәйҙер бер тетрәнешкә, тәрән кисерештәргә әҙерләнеп барырға икәнде лә иҫкәртеп торғандай ине.

Ошо тәңгәлдә Сибай концерт-театр берекмәһенең визит карточкаһына әйләнгән рух төшөнсәһе тураһында фекерләшеп китәйек әле. Бөгөн тамашасыны ауыр программалар, уйларға, ғазапланырға мәжбүр иткән тамашалар менән борсомаҫҡа тырыша мәҙәниәт коллективтары. Уларса, халыҡ тамаша залдарынан күңел асып, дәртләнеп, көлөп-йылмайып сыҡһын. Был беҙҙең тышҡы шатлыҡ, тышҡы тойғолар. Тамашаны ҡарағанда көлдөк-сәпәкәйләнек тә, сыҡтыҡ та онноттоҡ. Ә эске кисерештәр биргәнде улай тиҙ генә онотоп булмай. Тамаша һәр беребеҙҙең йөрәгендә булғанды айҡап-ҡутарып сығарған икән, тимәк, уның геройҙары ла, көйҙәре лә, йөҙҙәре лә күҙ алдында, күңелдә оҙаҡҡа һаҡлана. Тап шундай йөрәккә үтеп инерлек һәм аңға һеңерлек концерттар менән килә лә инде беҙгә сибайҙар. Сөнки уларҙа тап беҙгә кәрәк булған халыҡсанлыҡ бар. Һәм был үҙенсәлек беҙҙең эске рух менән тап килә. Асылда, рух ул беҙҙең барыбыҙҙа ла бар. Барыбыҙҙа ла. Ҡайһы берәүҙәр уны белеп, аңлап ҡына етмәй. Һәм ошондай тамашалар ҡарағанда ул рух уяна, ҡанат кирә лә инде. Берәүҙәр "рух сәхнәлә генә" тип тә ҡаршы сығыр. Яңылышаһығыҙ! Йөрәктә ул. Тап ана шул рух артистарҙы сәхнәгә алып менә, шундай тамашалар халыҡты залдар тултырып йыя һәм уята, уйландыра, күңеленә ғәм һала...

Ә инде сибайҙарҙың әлеге программаһының эстәлегенә килгәндә, ул милләтебеҙҙең данлы шәхестәренең береһе Шәйехзада Бабичҡа арналғайны. Бабичтың Көньяҡ Урал райондары халҡы араһында йәшәгән иҫтәлекле көндәрен сағылдырҙы ул. Тарих фольклор, ерле йолалар, замана үҙгәрештәре менән бергә үрелеп, ябай һәм аңлайышлы мөхиттә бирелде.

Был төбәктең урман-һыуҙары, ҡаҙылма байлыҡтары һәм иркенлеге урыҫ помещиктарын ҡыҙыҡтыра. Улар был төпкөл яҡтарға килеп урынлашып, нимә ҡылһалар ҙа закондары үҙ ҡулдарында булып, башҡорт халҡын иҙеп йәшәй. Шундайҙарҙың береһе буған Брагин, ҡомһоҙ талаусы булыуынан тыш, әхлаҡһыҙ тәртиптәр индереүе менән дә дан ала. Ул кейәүгә бирелә торған ҡыҙҙарға... беренсе төн хоҡуғын ала. Был ҡырағай ғәҙәткә күнергә теләмәгән халыҡ помещикты Талҡаҫ күле янында ҡарауыллап тороп, уҡтан атып үлтерә. Иҫ киткес бай һәм матур йолалар менән барған ҡыҙ йәрәшеү байрамы бына ошондай үс алыу сәхнәһенә әйләнеп китә. Әллә күпме мәсхәрәләнгән башҡорт ҡыҙҙары, тапалған намыҫ, өҙөлгән ғүмерҙәр өсөн язаһын ала Брагин...

Артабан йәш Шәйехзада Темәс һылыуҙары араһында. Беҙ уны бөйөк шағир итеп түгел, ә ҡыҙ-ҡырҡын менән шаярып күңел асыусы йәш кеше, тапҡыр, осҡор, сәсән егет итеп кенә күрәбеҙ. Сәхнәләге еңеллек, йәшлек, бер ҡатлылыҡ, еңелсә юмор иң нескә ҡылдарҙы сирткәндәй. Артистарҙың шул ҡәҙәр халыҡсанлығы, бер ниндәй драматизмһыҙ, ялғанһыҙ, пафосһыҙ уйнауы ысынлап әсир итә, арбай. Был тәңгәлдә, моғайын, сибайҙарға етеүсе юҡтыр. Арттырыу булмаҫ.

Темәс тирәһендәге ҡатмарлы ваҡиғалар, ауылдың ваҡытлыса Башҡортостандың баш ҡалаһы итеп билдәләнеүе, властың берсә аҡтарға, берсә ҡыҙылдарға күсеүе, Башҡорт ғәскәренең дә дөрөҫ юлды эҙләп аҙапланыуы һәм бөтөн ошо ваҡиғалар эсендә ябай халыҡтың ҡайнашыуы ла ысынбарлыҡ итеп күҙ алдына баҫтырылды. Режиссер Рөстәм Хәкимов ҡатмарлаштырмай, тарихи ауырлыҡ менән баҫмай, нисектер етеҙ һәм бөтөн итеп кенә килтереп сығарған был заман күренешен. Афариндан башҡа һүҙ юҡ уға.

Эйе, бөгөн башҡорт тарихы, уның билдәле шәхестәре хаҡында сығыштар ҙа, тамашалар ҙа күп. Әммә уларҙың барыһы ла бер кимәлдә түгел һәм барыһы ла бер үк хистәрҙе уята алмай. Үкенескә ҡаршы, күптәре тарихи ялтырауыҡ ҡына булып сыға. Ә бына ошондай, сибайҙарҙыҡы кеүектәре, рух менән һуғарылғандары, күңелде үҫтерә лә, илата ла, һыҡрата ла, тетрәндерә лә. Бындай әҫәрҙәр тәрбиәләй. Бындай тамашалар төптә быҫҡып ятҡан патриотик тойғоларҙы терелтә. Бындай концерттар үҙ-үҙеңә, халҡыңа, милләтеңә хөрмәт уята. Һәм бөгөнгә сәнғәт донъяһында ошондай ҡиммәттәргә хеҙмәт итеүсе, милли традицияларға тоғро ҡалыусы мәҙәниәт усаҡтары, коллективтар булыуы тамашасы өсөн үҙе бер бүләк, мәртәбә. Сибай концерт-театр берекмәһенә ижади үрҙәр һәм ошо юлдан тайпылмай атлау теләген еткереп, рәхмәт белдерәбеҙ.

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠЫҘ ТИП ҠЫҘЫҠМА:

## ҡәйнә ҡыҙҙан ярала

Насарҙы күрмәҫ борон яҡшының ҡәҙере юҡ, ҡартлыҡты күрмәҫ элек йәшлектең ҡәҙере юҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Мин аҙ кешеле халыҡтарҙы яратам. Мин бәләкәй һандарҙы яратам. Донъя аҙҙар менән ҡотҡарыласаҡ.

**(Андре Жид).**

Күрә алмаһалар, алмаһындар, тик ҡурҡһындар ғына.

**(Каин).**

Кәрәкмәгән нәмә гел ҡыйбат тора.

**(Катон).**

Автор китаптың яртыһын ғына яҙа: ҡалған яртыһын уҡыусы үҙе тултырып ҡуя.

**(Джозеф Конрад).**

Гонаһ ҡылырға теләмәү һәм белмәү араһында айырма ҙур.

**(Мишель Монтень).**

Һуңғы һалдат ерләнгәс кенә һуғыш тамамланасаҡ.

**(Александр Суворов).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Илдә енәйәтселек, боҙоҡлоҡ күп булыуына зарлана икән бер егет. Халыҡты нисек итеп тәртипкә күндерергә тип баш вата икән. Ошо һорау менән бер аҡһаҡалға барған был. Аҡһаҡал унан һорай икән: "Ә боҙоҡлоҡ ҡылған кешегә иң ҡаты яза ни була тип уйлайһың һуң?" "Үлемдер, моғайын", - ти егет. "Юҡ, улым, үлем түгел. Киреһенсә, ҡартайып, бер кемгә кәрәгең булмайынса, үлә алмай йөрөү иң яманы", - ти икән аҡһаҡал. "Һуң, ул енәйәт ҡылған боҙоҡ әҙәмдәр күбеһенсә йәштәр бит, уларға нисек бындай язаны бирәһең?" "Хоҙай Тәғәләнән бер йәш енәйәтсене ғибрәт өсөн ҡартайтып, үлә алмай йөрөгән бер өрәккә әйләндереүен һора, - ти икән аҡһаҡал. - Тик был ғәмәлде бар халыҡ алдында ҡылдырырға кәрәк. Һора шуны Хоҙайҙан". Егет ышаныр-ышанмаҫ ҡына халыҡты йыя, бер иң яман енәйәтсене тотоп килтереп, халыҡ алдына баҫтыра ла, үҙенең хөкөм ҡарарын иғлан итә: "Был бик күп енәйәттәр ҡылған, бик күп кешеләрҙең ҡарғышын алған әҙәм хәҙер һеҙҙең күҙ алдында бер кемгә кәрәкмәгән, үлә алмаған ҡартҡа әйләнһен", - ти. Һәм ни мөғжизә! Йәп-йәш егет халыҡтың күҙ алдында һөйкөмһөҙ бер ҡартҡа әйләнә. Үҙенең был хәлен күргән егет йүгереп барып упҡынға ырғый, ләкин унан тағы ла ҡот осҡосораҡ, имгәнгән, яраланған йән эйәһе булып килеп сыға. Шунда ул үҙенең үлә алмай, бер кемгә лә кәрәкмәгән ләғнәтле йән эйәһе булып йөрөйәсәге, шундай хөкөмгә дусар ителеүе тураһында аңлай. Был хәлде күргән халыҡ тәүбәгә килә. Ошо хәлдән һуң был илдә бер енәйәт тә ҡылынмай, ти".**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.

Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99, 246-03-24** |
| **Матбуғат таратыу** | **246-03-23** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 7 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 4007
Заказ - 100/02

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.